# *Беренсе бейеклек*

**“Аҡтамыр” студенттарҙың фәнни йәмғиәте ағзалары**
**конференция һәм бәйгеләрҙә**
**(докладтар, мәҡәләләр)**

*Етәксеһе: Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙы,*
*башҡорт теле уҡытыусыһы*

Йыйынтыкка Туймазы педагогия колледжының юғары категориялы башҡорт теле уҡытыусыһы *Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙы етәкселегендә* башҡарылған студенттарҙың эштәре индерелде. Был ижади–тикшеренеү эштәре менән студенттар төрлө бәйгеләрҙә, конференцияларҙа ҡатнашты, призлы урындар яуланы.

# Йөкмәткеһе:


1. **“Эй, һайрай ҙа һуң был һабантурғай...”** *Шағир Р.Ғариповтың ижадында ҡоштар образының сағылышы. Моратшина Ләлә..............................................................................4*
2. **Художественные произведения как средство патриотического воспитания учащихся на уроках литературы** (на примере башкирских произведений об Отечественной войне1812 года). *Камаева Эльвира.......6*
3. **Көтмәгәндә шундай ҡыҙҙар осрай, Шундай ҡыҙҙар — ят та ул инде!** *Исмәғилева Ләйсән........................................................9*
4. **Таңсулпан Ғарипованың «Бөйрәкәй» роман – эпопеяһында тарихи ваҡиғаларҙың геройҙар яҙмышында сағылышы.** *Камалтдинова Г.......13*
5. **Сая шәхестәр сафында.** *Хәмиҙуллина Динара*...........................16
6. ***“Бөйрәкәй” романының моң-биҙәктәре***. *Камалетдинова Г.*.....19
7. ***«Әҙәбиәт киңлегендәге яңы бейеклек»*** («Бөйрәкәй» романының башҡорт әҙәбиәтендә тотҡан урыны). *Моратшина.Ләлә...........22*
8. **Аҡмулла исеме мәңгелек** («М. Аҡмулла» мультимедиялы ҡушымтаһы). *Алчинова Алевтина..............................................25*
9. ***Ата-бабам эҙен юллап сумам тарихтарға***...Зәйнуллина А........32

**“Эй, һайрай ҙа һуң был һабантурғай...”**
**Моратшина Ләлә, Туймазы педагогия колледжының III курсы студенты**
«Йәшлек. Фән.Мәҙәниәт.» Рәсәй асыҡ конференцияһы *II урын.*
*Туймазы ҡалаһы. 2012 й.*

“Тәбиғәт – һәр бер бите күп нимәгә өйрәткән берҙән бер китап,”- тигән Гете. Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Ғариповтың шиғырҙарын уҡыған һайын был фекерҙең дөрөҫ икәнлегенә инанаһың. Шағир тәбиғәт хаҡында күпме шиғыр яҙһа, беҙгә шунса хәкиҡәт еткерә.

Халыҡ шағирының был темаға ҡараған шиғырҙары, ысынлап та, күп. Р.Бикбаев, Ф.Күзбәков, З.Ураҡсин кеүек билдәле әҙиптәр уларҙы юғары баһаланылар. “Был шәхестең барлыҡ яҙмышы ер-һыу яҙмышы менән айырылғыһыҙ”,-ти Р.Бикбаев, тәбиғәттең Р.Ғарипов ижадындағы роле тураһында. Беҙ ҙә был төркөм шиғырҙарҙы үҙ иттек. Сәскәләр, ҡоштар, ағастар, йылғалар - ниҙәр генә тасуирланмай уларҙа!

Гете һүҙҙәре менән әйтһәк, беҙ тәбиғәт тигән китаптың ҡоштар хаҡындағы битен асырға һәм уны Р.Ғариповтың шиғри юлдары аша өйрәнергә булдыҡ. Был беҙгә теманы билдәләргә мөмкинлек бирҙе: “Рәми Ғариповтың ижадында ҡоштар образы”.

Тикшеренеү эшебеҙ буйынса *шағирҙың ҡоштар хаҡындағы әҫәрҙәренең идея-эстетик үҙенсәлектәрен асыу бурысын* ҡуйҙыҡ һәм *түбәндәге маҡсаттарҙы билдәләнек:*

1. *Р. Ғарипов шиғырҙарын өйрәнеү, идея-тематик йөкмәткеһен тикшереү, художестволы үҙенсәлектәрен анализлау.*
2. *Ҡоштар хаҡындағы шиғырҙарҙы аңларға булышлыҡ итерҙәй өҫтәлмә сығанаҡтарҙы йыйыу, өйрәнеү.*
3. *Был тематик төркөмгә ҡараған шиғырҙарҙың Р.Ғарипов ижадында һәм башҡорт әҙәбиәтендә тотҡан урынын билдәләү.*
4. *Йәштәрҙә тәбиғәткә, Тыуған илгә һөйөү уятыуҙа, уларҙа матур сифаттар тәрбиәләүҙә был шиғырҙарҙың мөмкинлектәрен күрһәтеү.*

*Тикшеренеү эшебеҙҙең предметы: Рәми Ғарипов шиғырҙары.*

*Объекты: шағир ижадында ҡоштар образы сағылышы.*

Тикшеренеү эшебеҙ 3 параграфтан тора.

Р.Ғарипов ысын күңелдән тәбиғәтте һөйгән һәм уның серҙәрен үҙенсәлекле итеп асҡан. Ҡоштар хаҡындағы шиғырҙары ғына уның 30-ҙан артыҡ: “Йүрүҙән ҡаҙҙары”, “Күгәрсендәр”, “Торналар”, “Аҡсарлаҡтар”, “Ҡантүш турғайҙар”... Был әҫәрҙәрҙә беҙ киң билдәле һандуғас, ҡарлуғас, һабантурғай, кәкүк, сыйырсыҡ кеүек ҡоштарға тап булабыҙ. Әммә таныш ҡоштар таныш булмаған хистәр уята алыр көскә эйә икәнлеген шиғырҙарҙы уҡығас ҡына белдек.

Нескә күңелле шағир булараҡ, Р.Ғарипов күп кенә шиғырҙарында ҡоштарға , уларҙың гүзәл йырлауына таң ҡала. Бына мәҫәлән, “Ҡантүш турғайҙар” шиғырында автор ҡышҡы һыуыҡ көндәрҙә ҡыҙылтүштәрҙең ҡайтыуын тасуирлаған. Була бит шундай саҡ: тәбиғәттең матурлығын күрәһең, ә уны һүрәтләргә һүҙҙәр табылмай. Ә Р. Ғарипов әйтерһең, шиғыры менән картина яҙа: ҡоштар ултырыуынан саған алмағасҡа оҡшай, “алмалар” тупылдашып ҡарға төшә, ошо матурлыкты ҡарап тороусы лирик герой... Авторҙың һүҙ-буяуҙары сағыу һәм төрлө. Ошо мәлде татып кисерге, күрге килеү тойғоларын арттыра. Шағир беҙҙе донъяға шағирҙарса ҡарарға мәжбүр итә: Алмалары, алһыу алмалары

Тупылдашып kарға төшкәндә,
Ялkынынан яҙҙар башланғандай,
Ҡарҙар kайнап, боҙҙар бешкәндәй...

Ә бына “Һандуғас таңы” шиғыры – шағирҙың һандуғас менән һоkланыу йыры. Р.Ғарипов өсөн тәбиғәт - ул үҙе оло сәнғәт. Шиғырҙы уkыған һайын шағирҙың был сәнғәтте нисек тойған, kәҙерләгән икәнен аңлайһың. Ысын моң нисек күңелдең нескә kылдарын сиртә, шиғыр ҙа ана шундай көскә эйә.

Ҡоштар образына миҙгелдәр алышыныуын тасуирлаған шиғырҙарында ла тап булабыҙ. Һәр миҙгел дә яkын шағирға. “Ҡантүш турғайҙар”ҙа kыш мәле, “Ҡарғалар kайтыуы” шиғырында яҙ килеүе һүрәтләнә. Йәй көндәрендә уның һандуғас һайрауына иҫе китһә, көҙ көнө торналар менән моңһоулана.

Р. Ғарипов ижадында тыуған яk, бала саk темаһы ҙур урын ала. Ҡаҙ, күгәрсен образдары аша ул шул мәлдәрҙе һағыныуын еткерә.

Тәбиғәтте яратkан кешегә хас күҙәтеүсәнлек, тойғолар сафлығы һәм шағирлыk таланты. Ошо әйтелгәндәр хас Р. Ғариповтың был шиғырҙарына. Улар уkыусыны тойғоландыра, был мәлде күҙ алдына баҫтырыу, йөрәкте елкенләндереү kөҙрәтенә эйә.

Шул уk ваkытта ул үҙ әҫәрҙәрендә тәбиғәттең гүзәл йырсылары менән бергә тормош, йәшәйеш, кешеләр хаkында ла һүҙ йөрөтә, уйлана.

Ҡайһы саk был уйланыуҙар якшы һығымталар яһатмай. “Аkсарлактар” шиғырын алайыk. Әҫәр 3 бүлектән тора. Тәүге бүлегендә беҙ лирик герой менән аkсарлактарҙы күҙәтәбеҙ.

Аkсарлактар, аkсарлаktар!..
Осаһығыҙ kыйылып.
Саk торам мин, һоkланыуҙан
Ҡыскырмайса тыйылып.

Шағир уларҙы тасуирлауҙа сағыштырыуҙарҙы йәлләмәй: “Әҙернә – йәйә һымаk. Аkбуҙ kанаттарығыҙ, Суkышығыҙ – тоҫkалған уk, Мәргән kараштарығыҙ”. Ә 2-се бүлектә иртәнге сәйер тамаша тасуирлана: аkсарлактар балыk өсөн тартkылаша. Хәҙер уларҙы автор “меҫкен”, “төштөгөҙ kапыл күҙҙән” тигән һүҙҙәр менән kылыkһырлай. Ысынлап та, тәү kарашkа һоkланыу уятkан кешеләрҙең юk-бар өсөн “яҫkышыуҙары” тормошта була. Әгәр һин ғорур аkсарлактар затынан икән, был исемгә лайыk булып kал, тимәксе шағир.

“Бөркөт” шиғыры рус шағиры А.С. Пушкиндың “Тотkон” әҫәре менән ауаздаш. Ҡасандыр бейеклектәрҙә тау-kаялар аша осkан бөркөт бөгөн ситлектә “йоkомһорап” ултыра. Уның kанатында – күктәр һалkынлығы, kарашында - тауҙар ағышы. Ике шағирҙың әйтер һүҙе бер: бөркөт ситлек kошо түгел, ул – ирек kошо!

“Торналарға табыныу” шиғырын Р. Ғарипов дуҫы Т. Йосоповkа бағышлаған. Беҙ геройҙың сәсенә сал kунһа ла яңы бейеклектәргә ашkыныуын күрәбеҙ. Күңелендә “сая малай” йәшәгән шағирға инде kырk йәш етеп бара. “Күктәге торнаға ышанып, kулындағы сәпсекте ысkындырма” тигән мәкәл менән килешмәй, дуҫы Тимергә һабаk булыр һүҙҙәр әйтә шағир.

“Ҡарлуғас” шиғыры билдәле яҙыусы Б. Бикбайға бағышланған. Шағир kарлуғас аша онотолмаҫ образдарҙы тыуҙыра: kошсоkто, драманың төп героиняһын, һуғыш ауырлығын иңенә алған kатын-kыҙҙарҙы, улар хаkында уйланырға мәжбүр иткән Б. Бикбай kарлуғасын – драманы һәм уларға бәйле ҙур тарихты күҙ алдына баҫтыра. Эйе, ысын шағир әҫәрҙәрендә бәләкәй генә kарлуғас та оло һығымталар яһата.

Шиғырҙарҙан күреүебеҙсә, Р.Ғарипов тормош, кешеләр, улар араһындағы мөнәсәбәт хаҡында йыш уйланған. Тәбиғәтте, ҡоштарҙы күҙәтеү уға ҡыҙыҡлы дөйөмләштереүҙәр яһарға мөмкинлек биргән.

Шағирҙың мөхәббәт хаҡындағы шиғырҙары бихисап. "Мөхәббәттең бөйөклөгөн, күңелдәрҙе арбаусан моңон, күҙҙең яуын алыр төҫтәрен уҡыусыларға Р.Ғарипов кеүек еткерә алған шағирҙар башҡорт шиғриәтендә бик һирәк", - тип билдәләй Р.Бикбаев. Был шиғырҙарында автор күберәк һандуғас, аҡҡош, ҡайһы саҡ ҡайын ағасында моңланыусы кәкүк образдарына мөрәжәғәт итә. Һөйөү хистәре шағир күңелендә берсә ут уйната, берсә иремәҫтәй кеүек боҙҙар ҡалдыра.

"Уның әҫәрҙәре йөрәк серҙәрең менән йәшермәйенсә бүлешкән шиғри көндәлекте хәтерләтә",- ти Р.Бикбаев. Ысынлап та, был шиғырҙарҙа үҙеңдең тойғоларынды уҡығандай булаһың. Ошолар бөтәһе лә шағирҙың мөхәббәт хаҡындағы шиғырҙарын оҙон ғүмерле яһайҙар. Сөнки ысын күңелдән һөйә белгән кешеләр генә ошо хистәрҙе кисерә, ә ундайҙар беҙҙең арала күп.

Шағир Р.Ғариповтың ҡоштар образы сағылған шиғырҙары ҡыҙыҡлы, идея-йөкмәткеһе яғынан төрлө, тәрән йөкмәткеле, художестволы үҙенсәлектәргә бай. Был әҫәрҙәр әҙип ижадында ғына түгел, ә тотош башҡорт әҙәбиәтендә әһәмиәтле урын тоталар. Ул тәбиғәткә, дуҫлыҡ һәм мөхәббәткә бәйле тойғоларҙы, ғорурлыҡ, намыҫ кеүек төшөнсәләрҙе ошо төркөмдәге әҫәрҙәргә бәйләп еткерә. Был шиғырҙарҙы тикшереү мәлендә беҙ уның үҙен дә бөркөт кеүек ғорур шәхес, һабантурғай кеүек тормошто данлаусы, һандуғас кеүек мөхәббәт йырын йырлаусы нескә күңелле шағир итеп күҙ алдына баҫтырҙыҡ. Иманыбыҙ камил, беҙҙең йәштәштәр ҙә, киләсәк быуындар ҙа был әҫәрҙәрҙе уҡып илһам алыр, рухи кинәнес кисерер, донъяла йәшәүенә ҡыуаныр.

## Художественные произведения как средство патриотического воспитания учащихся на уроках литературы (на примере башкирских произведений об Отечественной войне1812 года)

***Камаева Эльвира Ильфировна, студенткаV курса.***

*Российская конференция «Юность. Наука. Культура.- Башкортостан». II место. Туймазы, 2012г.*

С высот настоящего ясно видится прошлое, история. Но для того, чтобы разглядеть и понять настоящее, не всегда нужно забегать вперед, скорее даже необходимо чуть отойти назад. Неправильны будут суждения тех людей, которые будут говорить, что через какое-нибудь столетие потомкам нашим, достигшим невиданного прогресса во всех отраслях жизни, многое из содеянного нашим временем покажется наивным, незначительным. Нет, с уверенностью можно сказать, что это неправильно. До сих пор наши сердца волнует история наших предков. История военной славы Башкортостана – это основа патриотического воспитания. В истории башкирского народа было много переломных моментов, но, несмотря на это, он смог достойно перенести все тяготы и лишения, найти внутренние силы для решения любых проблем. Что же было сподвижником такого патриотического духа? Это, прежде всего, любовь к родной земле, готовность пожертвовать своей жизнью ради её защиты, осознание того, что каждый человек является частью чего-то единого, то есть народа, общества и страны в целом, ведь патриотическое воспитание в жизни башкир – это традиция национальная.

В наше время в молодежной среде очень часто проявляются негативизм, демонстративно-отрицательное отношение к взрослым, жестокость в крайних ее проявлениях. Это говорит о том, что сейчас такие ценности, как любовь, патриотизм, отечество и уважение к людям ушли на задний план. Поэтому одним из острых вопросов является вопрос патриотического воспитания современной

молодежи. В этом году в связи с 200-летним юбилеем Отечественной войны и объявленным в России Годом истории, патриотическое воспитание является основной проблемой, которая волнует наши сердца. Исходя из этого, для своего исследования мы выбрали тему «Художественные произведения как средство патриотического воспитания учащихся на уроках литературы (на примере башкирских произведений об Отечественной войне 1812 года)». Мы считаем, что одним из наиболее оптимальных путей воспитания чувства любви к Родине у современной молодежи является изучение произведений художественной литературы [1,с57].

Отечественная война 1812 года оказала сильное влияние на мироощущение башкир. Это заметно отразилось в различных жанрах его фольклора: особенно в исторических песнях и легендах. Тот патриотический подъем, с каким башкирский народ готовился к походу, хорошо отражен в легендах песен. После победы над врагом любовь к родной земле вспыхивает с новой силой, народ воздает славу и хвалу тем, кто вернулся с победой, встречая их песней. Среди песен об Отечественной войне 1812 года особенно популярны такие, как: «Французская», «Иремель», «Эскадрон», «Батыр егет», «Сокол птица», «Вторая армия», «Хары сэс», «Баик», «Любизар», «Кутузов», «Кахым туря». Главным героем песен, рожденных в условиях огромного душевного подъема, является народ, во многих песнях повествование ведется устами народа , выражаются его мысли и чаяния. В то же время песни не обошли вниманием и известные исторические личности, отличившиеся на войне героизмом. Самой популярной среди них является песня “Кахым-туря”.

Многие писатели в своих произведениях раскрывают тему патриотизма, героизма, защиты родины. В произведениях, в которых повествуется об Отечественной войне 1812 года, раскрывается вклад башкирского народа в победу над врагом. Это произведения Яныбая Хамматова «Северные амуры», Баязита Бикбая «Кахым-туря», Фазыла Туйкина «Герои Отчизны», Мусы Гали «Башкиры в Париже», Мухамметши Бурангула «Отечественная война». Этих произведений немного, но каждое из них вызывает определенный интерес для изучения. Если в стихах Муса Гали и кубаире Мухаметши Бурангула описывается чувство гордости за великое прошлое, то в романе Яныбая Хамматова раскрыта вся сущность войны.

За примитивный на первый взгляд, оружие, французы, вынужденные признать в башкирских воинах достойного противника, называли их «северными амурами». Так назвал свой роман писатель Яныбай Хамматов. Его произведение «Северные амуры» является историческим источником, в котором отражены все события Отечественной войны 1812 года. В первой части, основываясь на фольклорный материал, писатель описал жизнь башкирского народа, во второй части, опираясь на реальные факты и исторические документы, - участие башкир в Отечественной войне. Роман знакомит читателя с сражениями, происходившими в эти тяжелые моменты с 1805 по 1825 года.

Патриотизм своего родного народа, военные традиции и дружба с русским народом подтолкнули писателя-драматурга Баязита Бикбая на написание драмы «Кахым-туря». В каждом эпизоде произведения писатель использовал исторические документы и народный фольклор. А в изображении характеров и социальных типов Баязит Бикбай опирался на традиции произведений Л.Толстого «Война и мир», М.Лермонтова «Бородино». Конфликт драмы состоит в человеческих судьбах, противостоянии против Наполеона, в изображении батыра Кахыма, потенциального «второго Салавата». Драма заканчивается трагично, так как в конце великий башкирский герой Кахым был отравлен.

В преддверии празднования 100-летия с начала Отечественной войны 1812 года Фазыл Туйкин написал драму «Герои Отчизны». Это произведение малоизвестно, но является интересным для исследования. И этот автор широко использовал фольклорный материал. Основными героями в драме является деревенские жители. В начале произведения они готовятся к свадьбе, но из-за начавшейся войны свадьба прерывается. Жители деревни теперь уже обеспокоены не подготовкой к свадьбе, а проводами мужчин-джигитов на войну. В конце произведения драматург описывает ту же деревню, но здесь уже у людей двойной праздник – победа в войне и продолжение незавершившейся свадьбы. Таким образом, Фазыл Туйкин показал, как народ, оставив свою личную жизнь на второй план, охотно шел защищать Родину, проявляя чувство ответственности за ее судьбу. Произведение проникнуто патриотической атмосферой [2,с178]

Если Ф. Туйкин свою драму посвятил 100-летию Отечественной войны, то кубаир народного сэсэна Мухаметши Бурангула «Отечественная война» был написан в годы Великой Отечественной

войны. Это произведение являлось призывом солдат к совершению героических подвигов. В кубаире основным персонажем является известный кураист и сэсэн-импровизатор Баик. Он призывал башкирский народ к защите Отчизны. Автор прославляет героизм русского и башкирского народа, а также известных личностей - русского полководца Кутузова, башкирского военноначальника Кахыма. В кубаире использована легенда о Джантюре и его жене Асылбике. Заканчивается произведение победой башкирских и русских героев над наполеоновскими армиями, взятием Парижа. Кубаир Мухаметши Бурангулова выходит в свет отдельной книгой в 1942 году и играет значительную роль в воспитании патриотического духа советских людей в годы Великой Отечественной войны 1941-1945гг.

В наше время тема Отечественной войны 1812 года раскрывается в основном в поэзии. Ярким примером является стихотворение Мусы Гали «Башкиры в Париже». Здесь он описывает свои ощущения при поездке в Париж. Поэт восхищается не красотой Нотр-Дама, Версаля, а тем, что здесь были его предки - победители Отечественной войны, башкирские войска. Автор, прежде всего, гордится историей своего народа.

Как видим, тема Отечественной войны 1812 года в башкирской литературе достаточно раскрыта. В первую очередь писатели, которые повествовали об этом историческом событии, показали высокий патриотизм. Эти произведения в настоящее время играют важную роль в воспитании у современной молодежи чувства любви к родной земле, и поэтому введены для изучения в школьную программу. Мы уверены в том, что чтение и анализ этих произведений, беседы о героях, об их подвигах, о битвах, где они участвовали, использование учителем материалов изобразительного искусства, фольклорных материалов, прослушивание народных песен будет способствовать воспитанию чувства гордости за героическую историю своего народа.

При изучении этих произведений на уроке мы ставим перед собой следующие задачи: заинтересовать учеников самим процессом чтения военно-патриотической литературы; формирование устойчивой потребности в чтении патриотических произведений; потребность в постоянном общении с историческим прошлым родного края, посредством краеведческого материала, историко-архитектурных памятников.

Учителю необходимо рассмотреть краткие сведения о писателе, его личность и особенности его творческой манеры, обратиться к проблематике произведений, рассмотреть таких персонажей, как Кахым-туря, Буранбай, Кутузов, обратить внимание на остроту и психологическую наполненность ситуаций, на то, как раскрывается тема человека и народа на войне.

Для изучения любого произведения, каждого автора башкирской литературы в определенном классе можно подобрать набор приемов и форм работы, которые можно комбинировать по-разному, но которые непременно должны вести к одному: к пониманию учащимися глубинной сути произведения, позиции автора. Во многом донесение идей и мыслей писателей и поэтов зависит от желания самого учителя, его собственной мировоззренческой позиции, от выбранных методов, приемов, форм и видов деятельности, которые бы обеспечивали лучший воспитательный эффект. Приступая к изучению темы «Отечественная война», учитель литературы, прежде всего, должен думать о том, как создать эмоциональное впечатление у ребят, сделать их соучастниками событий тех лет, приблизить то время. На уроках литературы будут эффективны такие методы, как беседа, рассказ, дискуссия, использование презентаций, метода проблемного обучения, выполнение творческих работ. Хорошими приемами при изучении произведений Отечественной войны являются также те, которые применяются на уроках литературы всегда: это выразительное чтение, чтение наизусть и пересказ прозаического текста. Они, в частности, позволяют добиться улучшения памяти учащихся, лучшего запоминания и понимания ими произведения. Следует, однако, отметить, что при чтении наизусть и пересказе, заучивание не должно происходить механически. Оно непременно должно производиться осмысленно, т.е. способствовать не только улучшенному знанию текста, а и его пониманию, раскрытию основных мотивов автора перед учеником.

Литературные произведения, изучаемые в школе - это лишь небольшая часть культурного достояния народа. Но именно они укореняют нравственный стержень личности. Многое зависит от волшебной встречи с книгой. Они увлекают читателя «течением мыслей», гражданственностью деяний, благородством чувств человека предшествующих эпох, воспитывают у каждого нового

поколения умение быть благородным, памятливым. Именно эти произведения углубленно и пристально всматривается в героические эпохи истории нашего народа, в духовные и нравственные корни реальных достижений, показывает высокий нравственный потенциал человека. Всё на земле стирается, кроме памяти. Поэтому важно воспитание памятью. Учителю-словеснику под силу провести такую беседу, чтобы у некоторых ребят на глазах выступили слезы, чтобы она запомнилась на очень долгое время и заложила основу для дальнейшего воспитания чувства патриотизма.

**СПИСОК ЛИТЕРАТУРЫ:**

1. Акманов И. Рассказы по истории Башкортостана. 2-е изд., дораб. и доп.- Уфа: Китап, 1995 .-214с.
2. Асфандияров А.З. Любезные вы мои.-Уфа: Китап,1992.-237 с.

## Көтмәгәндә шундай kыҙҙар осрай, Шундай kыҙҙар – ят та ул инде!

***Исмәғилева Ләйсән, Туймазы педагогия колледжының III курсы студенты***

*“Мин-йәш” Республика ижади эштәр бәйгеһе. II урын. Өфө kалаһы, 2009 й.*

Был һүҙҙәр башkорт әҙәбиәтен белгән кешеләр өсөн яkшы таныш. Уларҙы Р. Ғарипов яҙған. Кемде күреү уны шиғыр яҙырға kанатландырҙы икән? Быны берәү ҙә әйтә алмай. Әммә мин шуны беләм: эргәнән берәй сибәр kыҙ үтеп киттеме – Р. Ғарипов һүҙҙәре kылт итеп иҫкә төшә. Бына әле Нәфисәне күргәс, минең дә иҫемә төштө. Һылыу kыҙ педколледждың V курсында уkый. Сибәрлек бәйгеһендә лә һыр бирмәҫлек. Әммә республика кимәлендәге бәйгегә барып kайтыу ҙур һәм яуаплы эш булһа ла, иптәштәрең, эргәләге кешеләрең һәр ваkыт һоkланырлыk итеп йәшәү тағын да kатмарлыраk.

Беҙҙең бүлектә уkыусылар уны иң ижади студенттар рәтенә индерә. Бына әле беҙ уның менән әңгәмәләшеп ултырабыҙ.

- ***Нәфисә, беҙ һине йыр-моңға ғашиk кеше итеп күрәбеҙ. Был һөйөү kайҙан килә тип уйлайһың?***
- Баймаk яkтары йырсы, бейеүсе һәм башkа талантлы кешеләргә бик бай. Бәләкәй саkтан артистарыбыҙҙың концерттарына йөрөп, уларҙың ижады менән яkын танышмын. Тыңлаған йырҙар күңелде рухландыра, ә kараған бейеүҙәр, дәрт-дарманымды таштырып, яңы үрҙәргә әйҙәй. Шуға күрә лә йыр-моңға бәләкәй саkтан уk ғашиkмын.
- ***Һиңә нимә яkыныраk: бейеүме, сәнғәтме, әҙәбиәтме, фәнме, уkытыусылыk эшеме?***
- Иң тәүге kыҙыkһыныуҙарым шиғриәт менән бәйле. Шиғырҙарҙы бик күп уkыйым һәм үҙем дә яҙам. Уkытыусылыk эше мине бәләкәй саkтан арбаған инде. Быға тәүге уkытыусым сәбәпселер, бәлки, сөнки ул минең өсөн идеаль кеше кеүек күренде. Колледжға уkырға килгәс, фән өлкәһендәге төрлө тикшеренеүҙәр

үткәреп, үҙемде яңы баҫkысkа менгәндәй тойҙом. Бейеү -ул минең күңелем, бар булмышым тип тә әйтергә була. Сөнки мин бейегән саkта үҙемде боронғо башkорт kыҙҙары кеүек хис итәм. Ниндәйҙер ғорурлыk тойғоhо кисерәм. Бәлки, халkымдың ошондай оҫта hалынған, hәр кемдең күңелен арбарлыk бейеүҙәре булғанғалыр.

- ***hин ниндәй сараларҙа, бәйгеләрҙә kатнаштың? Улар ниндәй тәьҫораттар kалдырҙы?***
- Колледжда уkыған дәүеремдә Өфөлә үткәрелгән «hылыуkай» конкурсына барып үҙемде hынап kараным. Унда үҙем өсөн бик kыҙыkлы яңылыkтар менән таныштым. Уларҙы артабан үҙемдең образымды тулыландырыуҙа kулландым тиhәң дә була. Яратkан артистарым – Венер Камалов, Заhир Байыk менән «hин дә мин» аралашыуға бәйле күңелле иҫтәлектәр «алып kайттым».

2008 йылдың йәйендә республика кимәлендә үткәрелгән «Салауат йыйыны»нда «Сая kыҙҙар» конкурсында kатнашып, «Иң hөйкөмлө һәм наҙлы» дипломына лайыk булдым. Быңдағы хәтирәләрҙе яҙа башлаhаң, бик ҙур инша килеп сығыр ул. Шулай ҙа иң kыҙығын әйтеп үтәйем. Конкурста kатнашыр өсөн миңә махсус рәүештә атта йөрөргә hәм сабырға өйрәнергә тура килде. Бик күп kыҙыkлы мажараларға тарып бөттөм. Ярышта өсөнсө килдем. Атта үҙемде kыйыу тотоуым бар конкурсанттарҙы ла hokландырҙы, буғай.

- ***Беҙҙең бүлек студенттары hине ижади кеше тип hанай. Ә hин үҙеңде ниндәй итеп hүрәтләр инең?***
- Мин үҙемде әҙәбиәттәге «антитеза» тип әйтер инем. Күңел торошом hәр саk үҙгәреп тора. Мине яkшы белгән кешеләр быны беләләр. Әммә үҙемдә булған яkшы сифаттарымды hаkларға, арттырырға тырышам.
- ***Ижади үҫеүеңдә, ғөмүмән, шәхес булып формалашыуында ғаиләң дә йогонто яhайҙыр? hин нимәләр әйтер инең?***
- Ғаилә - бөтә кешенең дә иң kәҙерле байлығы. «Бөтә башланғыс ғаиләлә» тигән фекер менән тулыhынса ризалашам. Үҙемдең ошолай булыуыма ата-әсәйемә ҙур рәхмәтлемен. Атайым мине тырыш, еңмеш, ғәҙел, түҙемле булырға өйрәтһә, әсәйем итәғәтле булырға, кешегә тик яkшылыk kылырға өндәне. Өләсәйем гел дә: «Яkшы hүҙ йән аҙығы, яман hүҙ баш kаҙығы», - ти торғайны. Был hүҙҙәрҙә дөрөҫлөк ята.
- ***hин киләсәктә башkорт теле уkытыусыhы буласаkhың. Ижади кеше менән ижади уkытыусы. Улар тап киләме?***
- Алла бирhә, донъялар имен-аман тороп, үҙ hөнәрем буйынса эшләhәм, яkшы уkытыусы булырға тырышасаkмын. Тәүге йылда

адаптация үтермен. Ә киләһе йылдарҙа үҙемде ижади яҡтан да үҫтерергә лә бар көсөмдө һаласаҡмын. Минеңсә, уҡытыусы мотлаҡ ижади яҡтан үҫергә тейеш.

- ***«Эш — икенсе әсәң һинең» тигән һүҙҙәрҙе нисек аңлайһың?***
- Был һүҙҙәр, минеңсә, «бәхет башы хеҙмәттә» тигән һүҙҙәр менән ауаздаш. Тик эшләгән кеше генә үҙен бәхетле итеп тоя.
- ***Ниндәй хыялдар менән янып йәшәйһең?***
- Алла бирһә, һөйгәнем менән бәхетле ғаилә ҡорорға теләйем. Әлегә иң мөһиме шул. Һәм, әлбиттә, көрсөк ваҡыты тиҙ үтеп китеп, үҙ һөнәрем буйынса мәктәпкә уҡытыусылыҡ эшен башларға, «дөрләп янып» эшләргә!

Һүҙемде Р. Ғарипов шиғыры менән башлағайным Нәфисә менән һөйләшкәндә, әҙиптең эш, хеҙмәт хаҡындағы шиғырҙары иҫкә төштө:

Һөйһәң, һөй һин, үкенмәҫлек итеп,
Эшләһәң һин, эшлә емереп!

Нәфисә менән беҙ бөтә уйлағандарын тормошҡа ашырырға көс ҡеүәт, дәрт-дарман теләп айырылыштыҡ.

Колледжда ижади студенттарыбыҙ бихисап. Мәҫәлән, Алчинова Алевтина тигән исем әллә күпме фәнни сараларҙа яңғырай. Әйткәндәй, беҙҙең колледж был ҡыҙҙы ла ижади студент тип һанай. Ижади ҡыҙҙар менән танышыуыбыҙҙы дауам итеп, Информатика бүлегенең 33-сө төркөмөнә юлланабыҙ. Беҙҙе бәләкәйерәк буйлы, асыҡ көрән сәсле, күҙҙәренән нур бөркөп торған ҡыҙ ҡаршы алды. Әңгәмәне башлайбыҙ.

- ***Алевтина, һине фәнгә бәйле ваҡиғаларҙа күп ишетергә тура килә. Фән менән ҡыҙыҡһыныу ҡасан башланды? Кем булышлыҡ итте?***
- Фән менән ҡыҙыҡһыныу икенсе курстан башланды. Салауат Ришат улы күп студенттарҙы тикшереү эшмәкәрлегенә йәлеп итте. Был эште башҡарырға, әлбиттә, минең үҙемдең дә теләгем бар ине. Ошо ваҡытта ике тикшеренеү эшен параллель алып барҙым. Беренсеһе Мифтахетдин Аҡмулланың тормошо, ижады һәм ҡараштарына бәйле, ә икенсеһе - граждандар һуғышы буйынса тикшеренеү. Ошо ваҡыттан мин фәнни эштәр башҡарыуға әүәҫләнеп киттем тип әйтһәң дә була.
- ***Үҙеңдең ҡатнашҡан бәйгеләр, фәнни хеҙмәттәрең хаҡында таныштырып үтһәңсе.***
- Үткән йылда «Рус түгел мин, ләкин росиянмын!» тигән тасуири уҡыусылар бәйгеһендә ҙур теләк менән ҡатнаштым. Быйыл беҙҙең төркөмдән биш студент Салауат Ришат улы етәкселегендә Мәскәүҙә уҙғарылған «Флёров уҡыуҙары» конференцияһында булып ҡайттыҡ. Тағы ла республика кимәлендә үткән «Йәшлек.

Фән. Мәҙәниәт.» фәнни-практик конференцияһында тикшеренеү эштәре менән сығыш яһаныҡ. Июль айҙарында йәйге тикшеренеү мәктәбенә эләктем. Ул Тверь өлкәһе Фиров районы Рождество ауылында ойошторолдо. Ике аҙна уҡыу дәүерендә беҙ репортаж яҙыу, интервью алыу кеүек эштәргә өйрәндек, шулай уҡ төркөмдәргә бүленеп ҡыҙыҡлы газеталар сығарыу эшен башҡарҙыҡ.

- ***Яңыраҡ республика кимәлендә үткән «Педагогик оҫталыҡ»та һин төрлө эштәр башҡарҙың. Шулар хаҡында һөйлә әле.***
- Беҙ Мөсифуллин С.Р. улы менән күптән уйлап йөрөгән уйыбыҙҙы тормошҡа ашырҙыҡ – феминизм проблемаһына арналған «түңәрәк өҫтәл» үткәрҙек. Ҡатын-ҡыҙ булараҡ мине был һорау әллә ҡасан борсой ине. Эшләү барышында әллә күпме яңылыҡтар белдем. «Түңәрәк өҫтәл» уңышлы, файҙалы үтте һәм юғары баһаға лайыҡ булды.
- ***Беҙҙә оҙаҡламай республика кимәлендә тағы бер сара - «Педагогика һәм психология буйынса педколледж студенттары бәйгеһе» көтөлә. Моғайын, ҡатнашаһындыр?***
- Беҙ концертта ҡатнашабыҙ. Бейейбеҙ. Был шөғөл миңә бик оҡшай, ошонда ял итәм тип әйтһәм дә була.
- ***Һине колледж студенттары ижади кеше итеп һанай. Был исемгә лайыҡ булыр өсөн ниндәй сифаттар кәрәк? Ҡайһы сифаттарҙы тәбиғәт бирә, ҡайһынынһын булдырырға кәрәк?***
- Был кешенең характерына бәйле. Әгәр кеше яуаплы, инициативалы, үҙ эшен ҙур дәрт менән башҡарыусы һәм оптимист булһа, минеңсә, бындай кеше бөтә уйлаған эштәрен тормошҡа ашыра ала. Тәбиғәт биргән сифаттарҙы үҫтереү өҫтөндә һәр ваҡыт эшләргә кәрәк. Өлгәшкән уңыштарҙа туктап ҡалмаҫҡа, һис шикһеҙ алға барырға!
- ***Уҡыуға нисек өлгәшәһең? Буш ваҡытың ҡаламы? Буш ваҡытта яратҡан шөғөлөң бармы?***
- Былай минең буш ваҡытым юҡ тиерлек Яңы ғына эшҡыуарҙар курсын үттем, көн дә бейеү түңәрәгенә йөрөйөм. Был - минең хобби. Шулай уҡ йога менән шөғөлләнәм, ул миңә энергия бирә.
- ***Ата-әсәң һинең ошондай тулы ҡанлы тормошоңа нисек ҡарай? Ҡаршы килмәйме? Ғөмүмән, ғаилә йәш кешегә, баланың үҫеүенә нисек йоғонто яһай тип уйлайһың?***
- Әлбиттә, ғаилә баланың үҫеүенә ҙур йоғонто яһай. Мин үҙемдең ата-әсәмде бик яратам. Улар минең бәйгеләрҙә ҡатнашыуыма ҡаршы килмәйҙәр, киреһенсә, ярҙам итәләр. Йәш сағында ата-әсәйем дә актив булған, шуға күрә улар мине аңлай.
- ***Киләсәктә үҙенде ниндәй уҡытыусы итеп күҙаллайһың?***

– Үҙемде бик талапсан, ғәҙел уkытыусы итеп күрәм. Уkыусыларҙы тәрбиәле, аkыллы, белемле кеше итеп үҫтерергә тырышасаkмын.

Бейергә, шиғыр һөйләргә, фәнни хеҙмәт өлкәһендә эшләргә, гәзиткә мәkәләләр яҙырға һәләтле kыҙ был Алевтина! Киләсәктә лә тукталып kалмаясағына ышанысты белдереп, олораk уңыштарға ирешеүен теләп айырылышабыҙ Алевтина менән.

Һеҙ, бәлки, көләңкөрәп kуйырһығыҙ, әммә Алевтина менән һөйләшеү мине тағын да яратkан шағирым Р. Ғариповты иҫкә төшөрҙө. Ул да бит уkыған сағында төрлө эштәр менән шөғөлләнә. Һәм ниндәй кеше булып китә! Уңыштар һеҙгә, kыҙҙар!

Күңелдә матур һәм яkты тойғолар уянды. Әлбиттә, ошондай шәхестәр менән аралашыу минең өсөн ҙур бәхет. «Бына ул өлгө алырлыk kыҙҙар!» - тип уйлап kуяһың. Кеше доньяла үҙ урынын, яратkан һөнәрен тапһа, «Яҙмышым бәхетле булды», - тип әйтә ала. Һис kасан күңел төшөнкөлөгөнә бирешмәйенсә, бөйөк хыялдар менән йәшәгән кешеләргә һоkланып бөтә алмайым.

Ысынлап та, беҙҙең педколледжда шағирҙарҙы илһамландырырлыk, йәштәр өлгө алырлыk, оло быуын ғорурланырлыk kыҙҙар бар.

## Таңсулпан Ғарипованың «Бөйрәкәй» роман – эпопеяһында тарихи ваҡиғаларҙың геройҙар яҙмышында сағылышы

***Камалтдинова Гөлназ,*** ***Туймазы педагогия колледжының IV курс студенты***

*“Филологик фәндәр:йәш филологтарҙың kарашы” Бөтә Рәсәйябыk конференцияһы. Стәрлетамаk, 2012 й.*

Егерменсе быуат быуат башында бөтә төрки донъяһында иң уҡымышлы заттарҙың береһе Риза Фәхретдинов бер хеҙмәтендә «Донъяла йәшәргә һәм башҡалар рәтендә ғүмер һөрөргә теләгән милләт үҙенең үткән көндәрен белһен һәм үҙ тарихы менән дуҫ булһын» тип яҙып ҡалдырған. Бына инде беҙ XXI быуатҡа аяҡ баҫтыҡ. Ә үткән шаулы быуат тарихта ғына ҡалды. Шулай ҙа ошо 100 йыл эсендә ниндәй генә ваҡиғалар булмаған! Был тетрәндергес ваҡиғалар кешеләр яҙмышына, йәшәйешенә, уйҙарына, маҡсаттарына ҙур йоғонто яһаған. Билдәле башҡорт прозаигы Т. Ғарипованың «Бөйрәкәй» роман-эпопеяһын уҡығас, ошо фекерҙең раҫ икәненә тағы ла нығыраҡ инандыҡ. Әҫәр кеше яҙмышы, тарих, милләт хаҡында уйлата. Нисек кенә булмаһын, был беҙҙең дөйөм тарихыбыҙ һәм беҙгә унан һабаҡ алып башҡалар рәтендә йәшәргә кәрәк.

«Был китапҡа тотош быуат һыйған. Ниндәйҙер мөғжизә менән тарих китаптары юҡҡа сыҡһа, Таңсулпан Ғарипованың роман-эпопеяһы буйынса егерменсе быуатты ҡайтанан тергеҙеп булыр ине » - тип яҙа Рәйес Түләк авторҙың «Бөйрәкәй» пенталогияһы хаҡында [3:123]. Әҫәрҙә башҡорт халҡының билдәле бер осорҙа кисергән ауыр хәле, йәшәү рәүеше тасуир

ителә һәм Тирәкле ауылында барған хәл-ваҡиғалар аша дөйөмләштерелә. Кешеләрҙең социализмда йәшәгән осорондағы етешһеҙ көнкүреше, аслыҡтан, фәҡирлектән ыҙаланыуы быуаттың төрлө этаптарында (революция, репрессия, һуғыш, үҫешкән социализм, баҙар иҡтисады) сағылдырыла . Егерменсе быуат дауамындағы төрлө сүрәттәге, төрлө дәрәжәләге социаль катаклизмдар әҙәмдәр яҙмышын ни ҡәҙәрле аяуһыҙ ойпалай! Роман геройҙары менән танышыу аша ирекһеҙҙән шундай фекергә киләһең. Ә “Бөйрәкәй” романында геройҙар байтаҡ ҡына. Автор тарафынан тыуҙырылған һәр образ үҙенсәлекле, уларҙың һәр кемеһенең тәҡдиренә яҙғаны, образлы фекерләү менән үрелеп, уҡыусыны һәр саҡ көсөргәнештә тота. Ваҡиғалар төрлө осорҙа барһа ла, геройҙарҙың характерҙары, уларҙың тормошҡа ҡарашы уҡыусыға аңлайышлы, уйландырыусан.

Йәмғиәттәге бөтә бәрелештәрҙең кеше яҙмышына тәьҫир итеүе төп героиня Барсынбикә аша күрһәтелә. Рәсәйҙә Бөйөк Октябрь революцияһы башланғас , халыҡтың яҙмышы ҡырҡа үҙгәрә. Барсынбикә һәм уның ире Диңгезхандың да. Боролош йылдары уларҙы үҙ өйҙәренән ҡасып китергә, исемдәрен алмаштырырға, хатта игеҙәк балаларының икенсе һыңарын ташлап китергә һәм уны ситтән генә ғүмер буйы күҙәтеп йәшәргә мәжбүр итә. Ә яҙмыш ҡайһылай аяуһыҙ: үҙҙәренең бер туған икәнлеген белмәгән улы менән ҡыҙы бер–береһенә ғашиҡ була, Ихсанбайы кешелекһеҙ, уҫал ир–егет булып буй еткерә, ә Күкһылыуы кеше ғаиләһендә инсафлы ғына булып үҫһә лә , бәхеткә мандый алмай. Романдың һәр бүлеген уҡыған һайын, Фәүзиә-Барсынбикәнең аҡыллы, тәрән фекерләй белгән, көслө рухлы ҡатын итеп күрәбеҙ, уға ихтирамыбыҙ арта, хатта тормошобоҙҙа уға оҡшаған кешеләрҙе хәтерләй башлайбыҙ. Тәнҡитсе Р.Аҙнағолов уны “бөйөк ил инәһе” тип тә атай [2:273]. Фәүзиә яңы тормошто ҡабул итмәй, шулай ҙа кешеләргә ҡарата изге күңелле була, уларға ярҙам итеп йәшәй.

30-сы йылдарҙағы аяуһыҙ репрессия ла геройҙар тормошонда сағылыш таба. Роман-эпопеяның «Һандуғастың һайрар ғүмеркәйе» исемле өлөшөндә репрессия арҡаһында ике бәхетле кешенең, ике көслө заттың – Әптеләхәт менән Мәҙинәнең бәхете селпәрәмә килеүе һүрәтләнә. Әптеләхәт халыҡ дошманы тип аталып, гулаг төрмәләренә ебәрелә. Ә ҡатыны Мәҙинә, буласаҡ ҙур талант, халыҡ дошманының ҡатыны тип аталып, консерваториянан ҡыуыла. Илде золом күләгәһе, ҡара репрессия шәүләһе солғағанда, дөрөҫлөктө ярып әйтер өсөн тел тышаулы булған. Бөтә халыҡ ҡурҡыу менән бөгөнгө көн өсөн генә йәшәй. Парадокс: хөкүмәт уҡымышлы кешеләрҙе төрмәгә ебәрә, ә Ихсанбай кеүек ялҡау, наҙан кешеләргә тейеүсе юҡ. Рәйес Түләктең роман хаҡындағы һүҙҙәре иҫкә төшә: «Тарих тирмәненә бойҙай бөртөктәреләй төшкән кеше яҙмыштары матурлыҡҡа һәм батырлыҡҡа һынау тота. Бәғзеһе онға әйләнә, бәғзеһе кәбәккә…»[3:224]

Хатта Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ла был һынау дауам итә. Тарихта ҡалған шул осор тормошон Тирәкле ауылы кешеләренең көнкүреше, бер-береһенә мөнәсәбәте аша һынландыра автор. Ихсанбай кеүек әҙәмдәр илде дошмандарҙан һаҡлау урынына, ялған документ менән ҡалып, ауыл кешеләрен иҙеп, йонсотоп йәшәй: һалдаттарҙың балаларын туйҙырған һыйырҙарын тартып ала, Гөлбаныуҙың балаларын етем итә, колхозсы ҡатын–

ҡыҙҙарҙы ҡыйырһыта. Ә халыҡ үҙенең һуғыштағы улдарына һуңғы көсөн йәлләмәйенсә фиҙаҡәр ярҙам итә, өҫтәүенә, намыҫһыҙ кешеләрҙең баш–баштаҡлығын да өнһөҙ күтәрә. Ихсанбай кеүек кешеләр булғандыр, сөнки уға оҡшаш образдар әҙәбиәттә бар. Р. Солтангәрәевтың Хамбалы, мәҫәлән. Беҙҙең илебеҙ Бөйөк Еңеүҙе күрер өсөн, ҡайһылай күп ауырлыҡтар кисергән! Романдың «Башҡынайым ҡалды йәш кенә» бүлеген уҡығас, улар алдында беҙ ниндәй бурыслы икәнебеҙҙе нығыраҡ аңлайбыҙ.

Ихсанбай менән Барсынбикә романдың башынан башлап аҙағынаса тиерлек хәрәкәт итә. Ә бына Гөлбаныу әҫәрҙең башында бүреләргә эләгеп һәләк булһа ла, романдағы геройҙарҙың хәтерендә, телендә, күңелендә әҫәрҙең аҙағынаса барып етә: Ихсанбайҙың күңелендә – мәңгелек үкенесе булып; әсәһе Фәүзиә–Барсынбикәнең – мәңгелек ҡайғыһы булып; ауылдаштарының хәтерендә – матурлыҡтың, камиллыҡтың үлсәм берәмеге булып. Ире Хашим романдың башында кире герой булып күҙ алдына баҫа. Әммә Бөйөк Ватан һуғышы, ҡатынына мөхәббәте уның донъяға ҡарашын үҙгәртә. Хашим һуғыштан иҫән-һау ҡайтып, Гөлбаныуҙы һағынып, Мәҙинә ҡыҙына һәм ейәндәренә ярҙам итеп йәшәй.

Геройҙар яҙмышында торғонлоҡ йылдары ла юйылмаҫ эҙҙәр ҡалдыра. Кешеләр Коммунистар партияһы етәкселегендә тыштан ялтырап, эстән ҡалтырап тереклек иткән. Ҡайһы берәүҙәр, бигерәк тә замандың наҙан ҡатламы, яҙмыштарҙы ҡыйратып, кеше башын тапап юғарыға - райком, обком тирәһенә урынлашырға тырышҡан. Шул ҡатламды роман – эпопеяла Ҡыҙрасов - Таулы райкомының икенсе секретары, Ғәлимә - өсөнсө секретарь, колхоз рәйесе Саяф Шәйхетдинов кеүектәр тәшҡил итә. Бына, мәҫәлән, Ғәлимә Мәҙинә һәм уның ғаиләһенә ниндәй генә ауырлыҡтар килтермәй: Әптеләхәтте Саяф тарафынан үлтертә, Барсынбикәне суд аша больницаға бикләп ҡуя. Саяф үҙенең бәйһеҙлеге арҡаһында ҡатыны - биш бала әсәһе Нәғимәнең башына етә. Ә беренсе секретарь Әйүп Камалетдинов ике ут араһында тороп ҡала: бер яҡта - һуғыш йылдарында ысын дуҫы булған Әптеләхәткә ярҙам итеү теләге, халыҡтың тормошон аңлау, икенсе яҡта - партия алдындағы бурысы. Ошо ситуациянан сығыу өсөн һәм сәйәсәткә ҡаршы үҙенең протесен белдереү өсөн, берҙән–бер сара таба: кабинетында үҙ-үҙен атып үлтерә.

Әптеләхәт менән Мәҙинә - романда көслө шәхестәр, тормош, йәшәү, ғүмер төшөнсәләренең асылын тәрән аңлайҙар. Улар имгәнһә-имгәнде, кәмһетелһә-кәмһетелде, тик ерҙә йәшәү бурысына тап төшөрмәне. Әптеләхәт яңы - яңы иген сорттары сығарҙы, Мәҙинә алдынғы һауынсы булып китте. Роман аҙағында Мәҙинә донъя буйлап сәйәхәт ҡыла, илдәр, ҡитғалар тормошо менән таныша. Уның «Мәҙинә» бал ҡорто продукцияһынан ғына илленән ашыу төрҙәге косметика, дарыуҙар етештерелеп һатыла, фермаһында алдынғы белгестәр эшләй, Тирәкленән Таулыға тиклем асфальт һалдыра, мәсет төҙөтә…

Аҙнағолов Р. роман хаҡында былай ти: “Азатлыҡ өсөн яуҙар сапҡан, ҡан ҡойған, ҡорбан булған ата-бабаларыбыҙҙың быуындар сылбыры бәхетлеме? Бына ошондай һорауҙарға яуап эҙләп яҙа Таңсулпан Ғарипова роман-эпопеяһын”[2,274]. Беҙҙеңсә, хоҙай тарафынан бирелгән ғүмерҙе намыҫ менән

үтеү – үҙе үк бәхет. Шулай булғас, Мәҙинә, Әптеләхәт кеүек геройҙар бәхетле тип һаналырға тейеш. Әммә ни өсөн улар хаҡында уйланғанда күңелде һағышлы һәм әсенеүле тойғолар сорнай? Сөнки был геройҙар бәхетле тормошҡа ынтылғанда намыҫһыҙ әҙәмдәргә юлығалар. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙҙең илебеҙҙә үткән быуатта (әллә һаман да микән) халыҡ менән идара итеүҙә Ихсанбай, Саяф, Ғәлимәләр кеүек әҙәпһеҙ кешеләргә уңайлы шарттар тыуҙырылған. Шулай ҙа, хас әкиәттәгесә булмаһа ла, намыҫ менән халыҡҡа хеҙмәт иткән кешеләр еңеүсе була.

Күреүебеҙсә, егерменсе быуаттың милләт иңенә төшкән бола-болғаныштары, ижтимағи үҙгәрештәре Фәүзиә, Гөлбаныу, Әптеләхәт, Мәҙинә һ.б. геройҙарҙың яҙмыштары аша һүрәтләнә. Яҙыусы тарихи хәл-ваҡиғалар менән кеше яҙмышының бөтөнләгән күрһәтә. Романды уҡыу башҡорт халҡының, беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың һуғыш, репрессия, торғонлоҡ йылдарындағы тормошон яңынан бер күҙ алдынан үткәрергә мөмкинлек бирә. Т.Ғарипова үткән быуат хаҡында шундай дөйөмләштереүҙәр яһап, киләсәккә ҡарарға мәжбүр итә: беҙ егерме беренсе быуатта яҙмыш ҡуйған һынауҙарҙы намыҫ менән еңеп сығырбыҙмы?


Әҙәбиәт:

1. Ғарипова Т. «Бөйрәкәй» роман – эпопеяһы.- Өфө :Китап.-2006.-760 б.

2. Аҙнағолов Р. Ғ. Сәйләндәрем төҫлө – төҫлө. Ижади портретар. - Өфө: Китап, 2007. – 272 бит.

3. Түләк Р. Иблис көлгән ерҙә илай фәрештәләр…//Ватандаш. – 2006. – № 9. – 122 – се бит.


## Сая шәхестәр сафында


**Хәмизуллина Динара,Туймазы педагогия колледжының III курсы студенты**


*Туймазы kалаһы һәм районында Башkорт мәҙәниәте көндәрендә уҙғарылған “Туймазы ере-эшһөйәрҙәр һәм илһөйәрҙәр иле” kала фәнни-практик конференцияһы. 2010 й.*

Кеше ғүмере – аkkан һыу.Шул ағышта һин үҙ булмышынды, асылынды күрһәтә алдыңмы, халkым тип яндыңмы, хеҙмәтеңә һалған көс – ғәйрәтендән, аkыл-зиһенендән сатkылар тамдымы, атkарған эштәрендән күңелең kандымы? Ҡылған изгелектәрең тормош ыҙанынды биҙәймe? Бына ошо һорауҙар кеше ғүмеренә баһа биреүсе төп алымдарҙың береһелер, ти әҙип Р.Аҙнағолов. Миңә kалһа, был һүҙҙәр яҙыусы һәм шағирҙарға kарата әйтелгән кеүек. Бөгөнгө материаль байлыkkа ынтылыу заманында халkыбыҙҙың рухи байлығын арттырыу өсөн фиҙаkәр хеҙмәт күрһәткән яҙыусыларыбыҙ тик һоkланыу, ғорурланыу хистәре уята. Ә халыk аңы, халыk рухиәте яҙыусы ижадынан, эшмәкәрлегенән барлыkkа килә, йәшәй, үҫә, мираҫ kалдыра.

Туймазы ере – талантттарға бай яҡ. Был хәҡиҡәтте беҙ башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеү мәлендә тағы ла нығыраҡ төшөндөк. Бөгөнгө көндә тыуған әҙәбиәтебеҙ алға бара икән, яңынан-яңы бейеклектәрҙе яулай икән, бында Туймазы әҙиптәренең дә өлөшө ҙур. Ә.Мирзаһитов, Н.Ҡотдосов, М.Сиражи, Т.Арыҫлан, С.Сафуанов кеүек яҙыусыларыбыҙ, бер яҡтан, башҡорт әҙәбиәте үҫеүенә үҙ өлөшөн индерһәләр, икенсе яҡтан, Туймазынан сыҡҡан тигән исемдәре менән беҙҙең яҡтың абруйын тағын да нығыраҡ арттыралар.

Билдәле, һәр яҙыусы үҙенсәнлекле, ҡабатланмаҫ шәхес. Шағирҙарҙы алайыҡ.Тимер Арыҫлан исеме күптәребеҙгә билдәле. Ул Кәкребаш ауылында тыуып үҫә, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша, тарих уҡытыусыһы булып эшләй. Тимер Арыҫлан әҙәбиәткә кешеләрҙең хеҙмәт батырлыҡтары, уларҙың рухи үҫеүе, совет яугирҙарының патриотизмы хаҡындағы шиғыр һәм поэмалары менән әҙәбиәтебеҙҙе байыта.Шағирҙың поэтик һәләте юмор һәм сатира өлкәһендә лә асыла.

Төпкилде ауылы егете Муса Сиражи ҙа шағир булараҡ танылa. Уның «Уралым мондарына», «Әй тандары», «өфөм минең – йырым минең» кеүек йырҙары күптәргә таныш. Муса Сиражи уҡыусыларҙы хисләндерерлек шиғырҙар ижад итә, әҙәби тәнҡит, тәржемә менән дә ихлас шөғөлләнә. Балалар әҙәбиәте өлкәһендә лә емешле эшләй. Шулай уҡ ул байтаҡ телевизион фильмдарға сценарий яҙған автор ҙа булып танылa.

Бөтә яҙыусылар ҙа әҙәбиәткә бер төрлө килмәйҙер. Мәҫәлән, Йәрмөхәмәт ауылынан Наил Ҡотдосов хеҙмәт юлын ауылда башлай. Башҡорт ауыл хужалығы институтына инеп зоотехник факультетын бөтөрөп сыға, һуңынан аспирантурала уҡый. Шул уҡ ваҡытта унда әҙәбиәткә, ижадҡа ынтылыш та көслө була. Ул бер-бер артлы «Ғәфү ит, әсәйем», «Егет һүҙе», «Олимп тауы текәме» һ.б. повестарҙы яҙа. Әҫәрҙәрендә ауылдағы үҙгәреш, яңыса йәшәү һәм эшләү өсөн киҫкен көрәш, ошо ҡатмарлы процесс менән етәкселек итеү проблемаларын күтәрә. Яҙыусының әҫәрҙәрендә күңелдәрҙе ҡуҙғатырҙай шифалы заман һулышы бар.

Ә Бикмәт ауылынан Әсғәт Мирзаһитов драматург булып танылa. Бер нисә йыл «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире булып эшләй, яҙыусылар союзында әҙәби консультант вазифаһын башҡара. Ә.Мирзаһитов драмаларында оло ваҡиғалар, етди характерҙар тыуҙырырға ынтыла. Уның заман тышауҙарынан азат булған, бөгөнгө уҡыусыны һәм тамашасыны тулҡынландырған әҫәрҙәре байтаҡ.Ә.Атнабаев уның тураһында былай ти:«Ул башҡорт драматургияһына тиҫтәгә яҡын тап Әсғәтсә яҙылған бик үҙенсәлекле сәхнә әҫәрҙәре ҡалдырып китте. Улар заманында шаулап барҙы, хәҙер ҙә

үҙ kиммәттәрен юғалтмаған». Ысынлап та,«Әсәләр көтәләр улдарын»,«Әсәйемдең сал сәстәре» әҫәрҙәре кемдәрҙе генә тулkынландырмай ҙа, кемдәрҙе генә уйландырмай.

Ә. Мирзаһитовтың ауылдашы Суфиян Сафуанов – башkорт әҙәбиәт ғилеме һәм әҙәби тәнkит өлкәһендә билдәле ғалим. Ул әҙәбиәтебеҙҙе ил күләмендә танытыуға, уның гәүһәрҙәре менән төрлө милләт уkыусыһын таныштырыуға ынтыла. Әҙәбиәтебеҙҙә дуҫлыk, туғанлыk бәйләнештәрен өйрәнә. 70-се йылдарҙа өфөлә сығарылған «Башkорт совет әҙәбиәте тарихы» китабын яҙыуҙа, Башkорт әҙәбиәте тарихы тигән күп томлыk хеҙмәтте доньяға сығарыуҙа kатнаша, А.Карнай,Ғ.Хәйри,Ә.Бикчәнтәев,Н.Нәжми һәм башkа башkорт әҙиптәре хаkында күләмле хеҙмәттәр яҙа.С.Суфиянов бөгөнгө көндә лә әҙәбиәтселәрҙең алғы сафында бара. Уның мәkәләләр һәм рецензиялары матбуғат биттәрендә сығып тора. Уларҙа һәр яңы әҫәргә, заман талаптарын иҫәпкә алып, төрлө яkлы һәм объектив баһа бирергә ынтыла.

Профессиональ яҙыусылар менән бер рәттән kалабыҙҙа төрлө һөнәр эйәләре лә ижад менән шөғөлләнә. Уларҙың күпселеге - ”Алтын башаk” әҙәби берләшмәһе ағзалары. Был берләшмә үҙенең барлыkkа килеүенә 75 йыл тулыу айkанлы “ Kүңелдәр балkышы” тигән йыйынтыk сығара.

Йыйынтыkта төрлө һөнәр кешеләре-уkытыусылар, йәмәғәт хеҙмәткәрҙәре,ветерандар үҙҙәренең ижад емештәрен халыkkа тәkдим итәләр. Шулар араһында минең ауылдашым Аҙнағол ауылы уҙаманы Тимерйән Иҙрисов та бар. Ул- данлыkлы спортсы, СССР-ҙың почетлы спорт мастеры, заманында СССР-ҙың йыйылма командаһы ағзаһы, абруйлы судья, актер, оҙон көйҙө башkарыусы, өҫтәүенә шағир ҙа. «Был донъяға ғашиkмын», «Шиғырҙарым – йөрәк серҙәре», «Ашыkтырма яҙмыш», «Көҙгө мондар» шиғыр йыйынтыkтарының авторы ул.

Туймазы kалаһында йәшәүсе 1998 йылда Бәләбәйҙә үткән «Илһам шишмәләре» төбәк-ара шиғриәт фестивале еңеүсеһе Гөлмирә Бикбулатованы күптәр беләләр.Бөгөнгө көндә ул 6-сы һанлы мәктәптә эшләй.Яңыраk «Сүмесле ай» исемле шиғырҙар йыйынтығын сығара.Тыуған яkkа һөйөү,атай-әсәйгә тәрән ихтирам,бөгөнгө kатын-kыҙ яҙмышы хаkында уйланыуҙар сағылған йыйынтыkkа ингән шиғырҙарҙа.

Үҙенең халkын, тыуған ерен данлаған Ғәлимйән Шайәхмәтовтың ижады үҙенсәлекле. Шағирҙың һәр әҫәрендә беҙҙең көндәр һулышы

тойола, тыуған ер менән кешегә мөхәббәт, уларға тоғролоk - бына kайҙа шағирҙың ижади тамырҙары. Ул ҹ китап авторы.

Тимәк, ижад менән шөғөлләнеүсе райондаштарыбыҙ, яkташтарыбыҙ бихисап. Беҙҙең бәрәкәтле Туймазы ере тағын да башkорт әҙәбиәте киңлектәрен яулай алырҙай әҙиптәр үҫтерер тигән өмөттәр күңелгә йылылыk бирә. Докладымды Тимер Арыҫлан һүҙҙәре менән тамамлағым килә:

Барлыk йыуанысым шиғырҙарҙа
Бар бәхетем халkым телендә ,
Халkым kалһа әгәр мин kалырмын
Һүҙем йәшәр әле илемдә.

Эйе, былдай әҙиптәрҙе тыуҙырған, үҫтергән халkым әле йәшәр.Ә уларҙың әҫәрҙәре киләсәк быуындарҙы рухландырыр.

### *«Бөйрәкәй» романының моң-биҙәктәре.*

***Камалетдинова Гөлназ,*** **Туймазы педагогия колледжының III курсы студенты**
*Башkорт яҙыусыһы Т.Ғарипова kатнашлығында Туймазы kалаһында уҙғарылған китап уkыусылар конференцияһы. 2010 й.*

Был донъяла әҙәмдең йәшәү
арауығы kояш kалkkандан kояш
батkанға тиклем.Kалған ваkыт
бәндәнән башkа заттар өсөн...

-тип әйтә Таңсулпан Ғарипованың "Бөйрәкәй" романындағы төп терәге, таянысы Фәүзиә-Барсынбикә. Ысынлап та, Барсынбикәнең телмәр поэтикаһы тәрән мәғәнәле,йөкмәткеле, ғибрәтле һәм фәһемле.

Ә романдың поэтикаһы ниндәй һуң? Поэтика-телмәрҙә теге йәки был өндәрҙең сиратлашыуы арkаһында барлыkkа килгән яңғыраш,моң ғына түгел,яҙыусының стиль үҙенсәлеге лә,һүрәтләү саралары ла, һүҙҙең йәки һүҙбәйләнештең, һөйләмдең,текстың мәғәнәүи көсө лә. Шуға күрә телмәр поэтикаһы-әҫәрҙең удожестволылығын,обаздарҙың,характерҙарҙың көс-кеүәтен, үҫтерелешен асып биреүсе алым да. Телмәрҙәге тәрән мәғәнә,ғөрөф-ғәҙәт, һәр юрау-һынамыштар ҙа,мифологияға нигеҙләнгән йәшәү рәүешебеҙ биҙәктәре лә фәкәт поэтиканың бер сағылышылыр. Кешенең телмәре- унын асылын, ә моңо йырсыһын белгертә.

Романдағы геройҙар, тормоштоң ауыр ваkытына эләгәләр... Яҙыусы һәр бер ғаиләнең-Камалетдиновтарҙың,Мирхәйҙәровтарҙың,Ирназаровтарҙың,Шәмсетдиновтарҙың тормошон асыkтан-асыk һүрәтләп үтә. Ә романдың төп үҙәге булып Мәҙинә Ирназарованың тормошо тора.

Ошо геройҙарҙы хәтерҙә ҡалдырырлыҡ итеүсе сара- уларҙың телмәре.Был геройҙарҙың телмәрендә матурлыҡ,дөрөҫлөк,ҡыҫҡалыҡ йәшәй. Әйткәндәй,роман үҙе лә композицион яҡтан да,телмәре-тасуирлауы менән дә йыйнаҡ.”Бөйрәкәй” хикәйә кеүек тығыҙ,аһәңле яҙылған.Һүҙгә-тығыҙ,фекере-даръялай.Әйтәйек,әҫәр семәрҙәр талап итә икән, әлбиттә ,ул биҙәктәр үҙ сиратына нәзәкәтлелек тә талап итә, һөйләмдәр һәм фекерҙәр төҙөклөгөнә айырым иғтибар һорай. Ә яҙыусының телмәре, тап тәбиғәт күренештәре кеүек-берсә ойоҫҡота,берсә салт аяҙып китә,йә тундыра,йә йылыға иҙрәтә.Һөйләмдәге һүҙҙәр мәғәнә,фекер йөкмәп кенә йөрөмәй,ә моң да, көй ҙә йөкмәп йөрөй.

Әйткәндәй, моң-һағыш “Бөйрәкәй” пенталогияһында һөйләмдәрҙә, һөйләм теҙемдәрендә генә түгел, ә герой ҡылыҡтарының, тотош ваҡиғаларҙың айырылғыһыҙ компоненты булып оҙатып йөрөй.

Үҙенсәлекле мондо тыуҙырыуҙа йырҙар роль уйнай,беҙҙеңсә..Унда бөтәһе лә йырлай: Мәҙинә,Әптеләхәт, һауынсылар, эшселәр, балалар.Трилогияның тәүге китабы халҡыбыҙҙың “Бөйрәкәй” йыры менән башлана,икенсеһендә “Ашҡаҙар” йөрәккә ҡан һауҙыра,өсөнсөһө “Һандуғастың һайрар ғүмеркәйе”тигән йыр-моңға торошло исеме һәм мәғәнәһе менән күңелдәрҙе тетрәндерә.Мәҫәлән,байрамда Мәҙинә “Ашҡаҙар” йырын башҡара.Уны тыңлағандан һуң скрипач Давид ошондай һүҙҙәр әйтә:”Рәхмәт! Рәхмәт һиңә, Мәҙинә!-Мәҙинә.Скрипка яһай торған ағасты мин гел һеҙҙең бүлмәлә тоттом...Бына быға,-Давид эйәге менән алдында ятҡан, эшләнеп бөткән музыка ҡоралына ымланы,-һинең моңоң...тик һинең моңоң ғына һеңгән.”Мәҙинәнең әсәһе лә бик матур йырлаған.Ул элек төндәрен тәҙрәгә ҡарап моңланып, уйланып “Зөлхизә”не йырлағаны һаман да Мәҙинәнең күҙ алдында.Йырҙар менән башланып китеүҙең дә үҙенә күрә шартлылығы,символы бар,күрәһең.Быуаттар төпкөлөнән,сал тарих шырлығынан килгән моң-халҡыбыҙҙың рухи хазинаһы ғына түгел,ауыр яҙмышының көзгөһө лә. Ана шул көҙгө,йөҙөп сыға алмаҫлыҡ даръя булып,тормош миҙгелдәребеҙҙә сағыла килә.

Башҡорт халҡының йәшәү рәүеше,ғөрөф-ғәҙәте,юрау-һынамыштары әҫәрҙең йөкмәткеһен,әһәмиәтен,мәғәнәһен күтәрә.Улар ниндәйҙер кимәлдә хәл-ваҡиғаларҙы һүрәтләүҙә,һынландырыуҙа өҫтәлмә һүрәтләү сараһы булараҡ ҡулланыла. Улар күберәк Барсынбикә теленән һөйләнә.Ҡапыл ғына был һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөрлөк түгел кеүек,тик романды уҡыған һайын был юрау-һынамыштарҙың,легендаларҙың асылына төшөнә бараһың. Миҫал итеп мин Барсынбикәнең һүҙҙәрен иҫкә төшөргөм килә:”-Ҡалҡыуын

ҡалҡҡас,айҙың тулмай ни әмәле? Ә тулған ай көслө теләк, ләкин мөсһөҙ аҡыл йөрөткән йән эйәләрен ҡасан да асылына ҡайтармай ҡалмай. ”Ошондай һүҙҙәрҙе уҡый барған һайын Барсынбикәнең һүҙҙәрен,уның үҙен,хатта үҙенде нығыраҡ аңлай башлайһың.

Романда бүреләр үҙенсәлекле урын алып тора.Әйткәндәй,бүре образы әҙәбиәттә киң урын алған.Һәр яҙыусы улар аша ниҙер әйтергә ынтыла.Был романда Ихсанбай Күк бүрене баҙарҙан көсөк көйө алып ҡайта. Күк бүре ата бүрегә эйәреп ауылдан сығып китә. Ихсанбайҙар ҙа ят ауылға ситтән ҡасып килә.Улар ҙа бүре...Был ауылдағы кешеләргә бөтмәҫ-түкәнмәҫ хәсрәт килтереп сығып китәләр...Автор бүреләр яҙмышын Ихсанбайҙар ғаиләһе менән сағыштыра...Шулай итеп,бүре үҙенсәлекле символик образға әйләнә. Символдар ғөмүмән,образлылык тыуҙырыу сараһы,һүрәтләүҙең бер алымы.Ғөмүмән,Таңсулпан Ғарипова сағыу символдар менән эш итә.Барсынбикә менән Диңгезхандың йылғаның бер яғынан икенсе яғына сығыуы,ҡуш беләҙектең юғалыуы һәм табылыуы,Ихсанбайҙың галстукка бәйле хәтирәләр-бөтәһе лә авторҙың ым-ишаралар,символдар менән эш итеүен күрһәтә.

Телмәр поэтикаһынан һут алған мөнәсәбәттәр үҫтерелеше уҡыусы зиһененән ситтә тороп ҡала килә.Һүҙ сәнғәтендә нисек,ни рәүешле,ниндәй юлдар,ниндәй һүрәтләү саралары менән яҙыусы донъяһы үҙ уҡыусыһына асыла?Таңсулпан Ғарипова романында бик күп кенә һүрәтләү саралары ҡулланылған.Әйтемдәр һәм фразеологизмдар, ассоциатив һүрәтләү сараларынан сағыштырыу,метафора,эпитеттарҙы яҙыусы урынлы итеп ҡулланған.Мәҫәлән ,Камалетдиновтың күҙ алдына Мәҙинә ошолай килеп баҫа:”Ҡаштары ҡарлуғас ҡанатылай ҡыйылған,керпектәре ҡуйы күләгә яһап алһыу битенә һибелгән,сәс бөҙрәләре ҡулса-ҡулса булып тирләгән маңлайына йәбешкән ике ауыр толомо, йылан тиреһеләй йылҡылдап,шыма нәфис муйынына алҡынып,илаһи матурлыҡ менән тонйорап ятҡан түштәренә һылашҡан”.Бына ошо бер һөйләм аша ғына ла,беҙ Мәҙинәнең үҙен күргәндәй булып,уны яратып ҡабул итәбеҙ.Бына ҡайҙа ул һүҙҙең көсө,кеүәте!

Бына шундай тәрән мәғәнәле телмәрҙә һүрәтләү сараларында геройҙарҙың үҙ-ара мөнәсәбәтендә,йәшәү рәүешенең йола-ҡанундарында ята”Бәйрәкәй” роман-эпопеяһының поэтикаһы,моңо. яҙмышын Ихсанбайҙар яҙмышы менән сағыштыра... Шулай итеп, бүре үҙенсәлекле символик образға әйләнә. Символдар ғөмүмән, образлылыҡ тыуҙырыу сараһы, һүрәтләүҙең бер алымы. Барсынбикә менән Диңгеҙхандың йылғаның бер яғынан икенсе яғына сығыуы, ҡуш беләҙектең юҙалыуы һәм табылыуы, Ихсанбайҙың галстукка

бәйле хәтирәләре — бөтәһе лә авторҙың ым-ишаралар, символдар менән эш итеүен күрһәтә. Шулай итеп, Таңсулпан Ғарипова сағыу символдар менән эш итә.

Телмәр поэтикаһынан һут алған мөнәсәбәттәр үҫтерелеше уҡыусы зиһененән ҡайһы саҡ ситтә тороп ҡала килә. Һүҙ сәнғәтендә нисек, ни рәүешле, ниндәй юлдар, ниндәй һүрәтләү саралары менән яҙыусы донъяһы үҙ уҡыусыһына асылаҒ Таңсулпан Ғарипованың романында әйтемдәр һәм фразеологизмдар, ассоциатив һүрәтләү сараларынан сағыштырыу, метафора, эпитеттарҙы — бөтәһә лә үҙ урынында. Әйтерһең дә, ошо һүрәтләү саралары романдың ынйылары. Уларҙы уҡып үткәндә йәнгә шундай рәхәтлек йүгерә, матурлыҡ күҙ алдына килеп баҫа. Мәҫәлән, Камалетдиновтың күҙ алдында Мәҙинә ошолай килеп баҫа : Ҡаштары ҡарлуғас ҡанатылай ҡыйылған, керпектәре ҡуйы күләгә яһап алһыу битенә һибелгән, сәс бөҙрәләре ҡулса-ҡулса булып тирләгән маңлайына йәбешкән ике ауыр толомо, йылан тиреһеләй йылҡылдап, шыма нәфис муйынына алҡынып, илаһи матурлыҡ менән тонйорап ятҡан түштәренә һылашҡан. Бына ошо бер һөйләм аша ғына ла беҙ Мәҙинәнең үҙен күргәндәй булып, уны яратып ҡабул итәбеҙ. Бына ҡайҙа ул һүҙҙең көсө , кеүәте!

Шундай тәрән мәғәнәле телмәрҙә, һүрәтләү сараларында, геройҙарҙың үҙ-ара мөнәсәбәтендә, йәшәү рәүешенең йола-ҡанундарында ята Бөйрәкәй роман эпопеяһының поэтикаһы, моңо.

### ***«Әҙәбиәт киңлегендәге яңы бейеклек»***

(«Бөйрәкәй» романының башkорт әҙәбиәтендә тотkан урыны)

***Моратшина Ләлә, Туймазы педагогия колледжының III курсы студенты***

*Башkорт яҙыусыһы Т.Ғарипова kатнашлығында Туймазы kалаһында уҙғарылған китап уkыусылар конференцияһы. 2010 й.*

Абруйлы яҙыусы, күркәм һүҙ сәнғәтенең танылҡлы ҡәләм оҫтаһы, тәрән мәғәнәле ижадсы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Таңсулпан Ғарипова хаҡында күп һөйләргә мөмкин. Мәшһүр яҙыусыларыбыҙ Һәҙиә Дәүләтшина менән Зәйнәб Биишеваларҙың әҙәби традицияларын һаҡлап, артабан үҫтереп,

халҡыбыҙҙың йәшәү рәүешен төплө, нигеҙле итеп, үтә лә бер ихласлыҡ менән һүрәтләй ул. Уны бөгөн башҡорт әҙибәләренең өндәүсеһе, ниндәйҙер кимәлдә юл башлаусыһы тип атарға булалыр.

Әҙибәләр. Прозабыҙ мадонналары. Улар бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтенең төҫө, биҙәге, прозабыҙҙың йөҙө. Әлбиттә, әҙәбиәтте ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡына бүлеү кәрәкмәйҙер. Шулай ҙа әҙибәләр ҡатын-ҡыҙ психологияһын тәрәнерәк тоя, нескәрәк яҡтырта. Ә әҙиптәр ир күңелен ныҒыраҡ аңлай. Ҡатын-ҡыҙҙар ауылдағы хәл-әхүәлде ныҒыраҡ белә, күҙгә күренмәгән төпкөлдәге ағымдарҙы нескәрәк һиҙә. Ә ирҙәр эре ваҡиғаларға өҫтөнөрәк ҡарай... Ни генә тимә, әҙибәләр ижады яңы осор башҡорт әҙәбиәтендә үҙенсәлекле күренеш.

Яҙыусы Таңһылыу Ғарипованың ижады тураһында Әмир Әминев былай тиК «Унын әҫәрҙәре үҙенең тормошсанлығы, геройҙарҙың бай эсле донъяһы, тәрән кисерештәре, матурлыҡты күрә, аңлай, шул уҡ ваҡытта ғәҙелһеҙлеккә, яуызлыҡҡа нәфрәтләнә һәм ҡаршы сыға алыу тойғолары менән һуғарылған. Тағы ла өҫтәп шуны әйтер инем-кеше психологияһына үтеп инә белеү Таңсулпан Ғарипова әҫәрҙәренә хас күренеш.

Был сифаттар унын драмаларында ла, хикәйә һәм повестарында ла, “Бөйрәкәй” романында ла күренә.

Алдан әйтеүебеҙсә, хикәйә - яҙыусының тәүге йыры. Ул үҙенең беренсе хикәйәләр йыйынтығы менән үк башҡорт прозаһына өмөтлө, талантлы әҙибә килеүен иҫбатлай. Повесть һәм хикәйәләренән беҙ Таңсулпан Ғарипованың халыҡ мәҙәниәте бәрәмектәренең яңы биҙәктәрен, төҫтәрен, һыҙаттарын аса барыуын күрәбеҙ.

Әҙибә кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәт психологияһын оҫта һынландырыуын драматургия өлкәһендә лә ҡуллана.

Башҡорт драматургия үҫтереүҙә, унын сәхнә сәхрәһен яңы йөкмәткеле әҫәрҙәр менән киңәйтеүҙә, прозабыҙ үҙенсәлектәрен балҡытыуҙа Таңсулпан Ғарипованың ижады үҙе бер айырым урын алып тора.

Бөтә әҫәрҙәрен ҡарап сыҡҡас, беҙ Таңсулпан Ғарипова — егәрле ижадсы, тигән фекергә килдек. Уйлап ҡарағыҙ, драматургия жанрында активлашыуы «Бөйрәкәй» романының йыл һайын «Ватандаш» журналы биттәрендә баҫылған сағына тура килә. Романдың журнал биттәрендә баҫылған мәлендә, зәңгәр экранда Таңсулпан Ғарипованың «Төштәге йыр», «Бәхеткә ҡасҡандар» пьесалары буйынса Сибай һәм Стәрлетамаҡ театрҙары сәхнәләштергән спектаклдәр күренә, ә гәзит-журналдарҙа унын драма әҫәрҙәре премиялар яулауы хаҡында мәғлүмәттәр, рецензиялар

баҫыла. Шул уҡ ваҡытта «Йәй ташы» драмаһы буйынса «Сөмбөлдөң етенсе йәйе» тигән нәфис фильм төшөрөлә. Рафаил Аҙнағоловса әйтһәк, ҡайҙан килгән уға шул тиклем янып-ярһып ижад итеү көсө? Ҡатын-ҡыҙҙың сырағы ҡырҡ тиһәләр ҙә, ул да ғәҙәти кеше лә баһаӘ Әллә ҡырҡ сырағы ла дәррәү янған сағы булдымы икәнҒ

Ә Бөйрәкәй романына килгәндә һүҙ юҡ- ул башҡорт әҙәбиәтендә сағыу күренеш. Роман башҡорт халҡының яҙмыш даръяһы, ғазап менән хәсрәт араһындағы йәшәйеш эпопеяһы булып тора. «Бөйрәкәй» романы ҙур тарихи ваҡиғаларҙы, шулар менән бергә үрелеп, уларҙың уртаһында ҡайнаған халыҡ яҙмышын, тотош милләттең рухи донъяһын, кешеләрҙең үҙ бәхете, үҙ булмышы өсөн тормош стихиялары менән көрәшен сағылдырыусы ҙур әҫәр. Роман быға тиклемге күҙ өйрәнгән, күңел күнеккән әҫәрҙәргә һис тә оҡшамаған. «Бөйрәкәй» романында һ. Дәүләтшина, З. Биишевалар ҡуры, маяһы бар. Ана шул башланғыстан һут алып, Таңсулпан Ғарипова уны үҙенсә, яңыса үҫтерә, образлы күркәм фекерләү үҫешенә, әҫәрҙең композицион эшләнешенә яңыса һулыш бирә.

Шуға ла, «Бөйрәкәй» баҫылып сығыу менән халыҡ күңелен яулай. Ғөмүмән, башҡорт әҙәбиәтендә үҫешкән жанрҙарҙан һанала. һ. Дәүләтшинаның, Н. Мусиндың, З. Биишеваның, Я. Хамматовтың романдары менән беҙ яҡшы таныш. Әҙәбиәт ғилемендә тарихи, тарихи-революцион, заман проблемаларын сағылдырған романдар хаҡында бәйән ителә. Алда һанап үтелгән әҫәрҙәр менән таныш уҡыусы был романда ниндәй яңылыҡтарға тап булырға мөмкин. Беҙҙеңсә, улар түбәндәгеләр:

- Символик образдарҙы, деталдәрҙе оҫта файҙаланыуы, хатта, төп геройҙарҙың хәрәкәттәренә, характер асылдарына фон булдырыу йәһәтенән, тотошлайы менән аллегорияға ҡоролған күренештәр тыуҙырыуға ирешеүе;

- Төрлө йәштәге уҡыусыны ла телевизорҙағы триллерҙарҙан айырылып, мауығып уҡып китерлек ҡыҙыҡлы ҡырҡыу ҙа, тәбиғи ҙә ваҡиғалар таба алыуы һәм уларҙы нәзәкәтле эшкәртеп, уҡыусы зиһенен ҡамаштырмаҫлыҡ композициялар булдыра алыуы;

- Башҡорт халҡының социализмда йәшәгән осорондағы етешһеҙ көнкүренешенә, аслыҡтан, фәҡирлектән ыҙаланыуына тәүгеләрҙән булып етди, ихлас иғтибар бүлеүе;

- Башҡорт әҙәбиәтендә беренселәрҙән булып совет кешеләренең хөкүмәт ҡарарҙарындағы етешһеҙлектәрҙе аңлауын, уйҙарында

ғына булһа ла ошо ҡарарҙар менән килешмәүен, мөсһөҙ генә булһа ла ҡаршылыҡтар күрһәтеүен сағылдырыуы;

- Телгә иғтибарлы булыуы, телмәр менән генә кисерештәр, тойғолар, моң булдыра алыу һәләте...

Сығышыбыҙҙың тәүге өлөшөндә әҙибәләр ҡатын-ҡыҙ психологияһын нығыраҡ тоя тигән фекер әйткәйнек. Был романда Таңсулпан Ғарипова кеше күңеле нескәлектәрен, беҙ ҡайһы саҡ күрмәгән кисерештәрҙе тоя белеүен тағын бер мәртәбә иҫбатлай. Ошоларҙан сығып мин шуны әйтер инем: башҡорт әҙәбиәтендә ҡатын-ҡыҙ романы, ҡатын-ҡыҙҙар прозаһы юл яра.

Таңсулпан Ғарипованың «Бөйрәкәй» пенталогияһы башҡорт әҙәбиәтендә өр-яңы кимәл, өр-яңы бейеклек, өр-яңы түбәләрҙең береһе. Шулай уҡ ул бөгөнгө башҡорт милли прозаһының иң ҙур ҡаҙанышы ла.

## Акмулла исеме мәңгелек

(«М. Акмулла» мультимедиялы kушымтаhы)

***Алчинова Алевтина, Туймазы педагогия колледжының IV курсы студенты.***

«Йәшлек.Фән.Мәҙәниәт.» Рәсәй асык конференцияhы. *II урын. 2008 й.*

«Кеше ғүмере — аkkан hыу. Шул ағышта hин үҙ булмышынды күрhәтә алдыңмы, халkым тип яндыңмы, хезмәтеңә hалған көс-ғәйрәтендән, аkыл-зиhененндән саткылар тамдымы, аткарған эшендән күңелең kандымы? Бына ошо hорауҙар кеше ғүмеренә баhа биреүсе төп алымдарҙың береhелер», - ти билдәле ғалим Р. Аҙнағолов. Бөгөнгө йәштәргә үҙ тормошона kарата ла шундай мөнәсәбәт тыуҙырырға нисек өйрәтергә hуң? Аҙаk үкенмәҫлек итеп лайыkлы ғүмер кисерергә ниндәй «hykмаkтарҙы» hайларға?

Халkыбыҙ балаларҙы тәрбиәләгәндә шундай ысулдар kулланған: йәштәргә өлгө булырҙай кешеләр тормошо менән таныштырған, әҙәп-әхләkkә өйрәтерлек төрлө әҫәрҙәр - мәкәл-әйтемдәр, әкиәттәр, легендалар hөйләгән. Беҙҙең башkорт яҙыусылары, уларҙың әҫәрҙәре лә ошондай көс-kөҙрәткә эйә түгелме hуң?! М. Кәрим, h. Дәүләтшина, Ш. Бабич, М. Акмулла, С. Юлаев исемдәрен ишетеү менән күҙ алдыбыҙға көслө рухлы заттар килеп баҫа, kолағыбыҙға уларҙың әҫәрҙәре ишетелгәндәй була. Улар беҙҙе рухландыра, сафландыра, ҙур эштәргә әйҙәй.

Тимәк, әҙәбиәт дәрестәренең бөгөнгө заман мәктәп уҡыусыһын яҙыусы шәхесе өлгөһөндә һәм әҫәрҙәре аша тәрбиәләү мөмкинлеге ҙур. Беҙҙенсә, уҡытыу процесында информацион-технологияларҙы ҡулланыу был мөмкинлекте арттыра ғына.

Башҡорт әҙиптәре араһынан беҙҙе М. Аҡмулла исеме ҡыҙыҡһындырҙы. «Дуҫ тигәнең тыштан матур, эстән мөрдар (насар) булмаһын. Донъяһы тар булһа булһын, күкрәге тар булмаһын», тип дуҫлыҡтың нимә икәненә төшөндөрөүсе, иман, әҙәп, сабырлыҡ, ихласлыҡҡа саҡырыусы XIX быуат шағиры кем булған, ниндәй уй-ниәттәр менән йәшәгән, XXI быуат кешеләрен уйландырырлыҡ әҫәрҙәр яҙыуға нимә сәбәпсе булған?

Шулай итеп, «М. Аҡмулла» исемле мультимедиялы ҡушымта әҙерләгәндә түбәндәге бурыстарҙы ҡуйҙыҡ:

- әҙип шәхесе, тормошо һәм ижадына бәйле материалдар өйрәнергә һәм тупларға;
- уҡытыу процесында ҡулланыу өсөн уңайлы әсбәп әҙерләргә.

Был бурыстарҙы хәл итеү өсөн беҙ фәнни һәм методик хеҙмәттәр, әҙәбиәт һәм сәнғәт әҫәрҙәре менән таныштыҡ. Бөгөнгө көндә Аҡмулла исеменә бәйле республикабыҙҙа башҡарылған саралар хаҡында мәғлүмәттәрҙе өйрәндек. Гәзит-журнал биттәрендә сыҡҡан яңылыҡтарҙы ла иғтибарҙан ситтә ҡалдырманыҡ. Был йәһәттән бигерәк тә башҡорт теле буйынса студенттарҙың фәнни йәмғыяте (етәксеһе Кәримова Г.Я.) ағзалары әүҙемлек күрһәтте. Мультимедиялы ҡушымтаға йыйылған материалдарҙың күпселеге – улар тикшеренеүе һөҙөмтәһе.

М. Аҡмулла – халыҡтың яҡты тормошо өсөн үҙен аямай көрәшеүсе, шиғырҙары менән аң-белемгә, әҙәпкә өндәүсе тура һүҙле ялҡынлы шағир. Илгиҙәр – философ, уҡытыусы, башҡорт еренән ситтә лә билдәле әҙип. Фекерҙәренең тәрәнлеге һәм ул күтәргән проблемаларҙың киҫкенлеге бөгөнгө көндә лә үҙ әһәмиәтен юғалтмай. Хеҙмәттә шағирҙың биографияһы һәм шиғырҙары төп урынды ала. «М. Аҡмулла образы сәнғәт әҫәрҙәрендә» бүлеге шағирҙы, унып йөҙ-һынын, йәшәгән осорҙо күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итә. Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр: яҙыусы, рәссам, скульпторҙар әҫәр ижад иткәндә, һайлаған теманы йөрәге аша үткәрә. Шул уҡ ваҡытта был образ рухландырырға ла тейеш. Шуғалыр ҙа хеҙмәттә тәҡдим ителгән сәнғәт әҫәрҙәре Аҡмулла шәхесенә ниндәйҙер яңылыҡ өҫтәй, уйландыра.

Шағир исеменең бөгөнгө көндә лә онотолмауы аңлашыла. Уның исемендәге премиялар булыуы, Туҡһанбай ауылында музей асылыуы, БДПУ-ға шағирҙың исеме бирелеүе – бөтәһе лә халҡыбыҙҙың шағирҙы нисек яратыуын, ихтирам итеүен күрһәтә.

Шәхес - халыкты, халыk шәхесте күтәрә тигәндәре дөрөç. Был хәkиkәтте еткереү өсөн беҙ шағир исеменә бәйле республикабыҙҙа башkарылған эштәр хаkында материалдарҙы индерҙек. Аkмулла рухы һүнмәй, унын изге юлын дауам итеүселәр бар һәм буласаk. Хеҙмәттә башkорт әҙәбиәте уkытыусыларына уkытыу процесын ойоштороорға ярҙам итерҙәй дәрес өлгөләре, төрлө мәkәләләр, әҙәбиәт исемлеге һәм тағын да kыҙыkлы материалдар тәkдим ителә.

Дөйөм алғанда, «М. Аkмулла» мультимедиялы kушымтаһы әҙәбиәт һәм Башkортостан мәҙәниәте уkытыусыларына, студенттарға, шағир ижады менән kыҙыkһыныусыларға тәғәйенләнә. Һәр шағирҙың, яҙыусының үҙ донъяһы бар. Беҙ һеҙҙе ябай ҙа, серле лә тойолған Мифтахетдин Аkмулла донъяһының тәрән мәғәнәһенә үтеп инергә саkырабыҙ.

### *Ата-бабам эҙен юллап сумам тарихтарға...*

***Зәйнуллина Алһыу, Туймазы педагогия колледжының II курсы студенты.***

Республика колледж һәм училищеларының ижади бәйгеһе. *I урын. 2003 й.*

Ата-бабам эҙен юллап сумам тарихтарға,
Ырыу kаны тарта мине төрлө тарафтарҙан
Һәр исеме – телле, түлле, ерле шәжәрәмдең
Ғазап, хафа, kомар, оран kайнай kараштарҙа!
Ҡ.Аралбай.

Тыуған илдең иkһеҙ-сиkһеҙ болондары, бейек текә тауҙары, күкрәп үçкән урмандары, балыkkа бай күлдәре һәм йылғалары – бөтәһе лә күңелде дәртләндерә, тәнгә бөтмәç-төкәнмәç көс-kеүәт өçтәй. Бында киң яландар, уйһыу болондар, ҙур kалын урмандар – һәммәһе лә йәшәреп ултыралар. Матур ал, kыҙыл, һары, зәңгәр, күк, күгелйем сәскәләр йәшел яландарҙың йөҙөн матурлайҙар. Ошо гөлдәр, сәскәләр араһында аkтан kыҙылға, зәңгәрҙән күккә kунған ал -гөл күбәләктәр туkтауһыҙ осалар. Матур һандуғастар, сыйырсыkтар, ала муйын kарлуғастар үҙҙәренең дәртле йырҙары менән бөтә донъяны яңы бәхеттәргә, бөтмәç-төкәнмәç шатлыkтарға саkыра.

Тәбиғәттең матурлығы һәм байлығы кеше өсөн. Кешенең тойғолары йырға әүерелһә, йөрәге моңға төрөнһә, күңеле наҙға ни

тиклем тулһа, шул тиклем кеше үҙен бәхетлерәк итеп тоя. Төрлө-төрлө сәскәләр, ҡош тауыштары, шишмәләр сылтырауы, һыҙылып ҡына ал таң атыуы ла, сихри биҙәктәр төҙөп болоттарҙың зәңгәр күктә йөҙөүе лә — бөтәһе, бөтәһе лә беҙҙең өсөн, кеше өсөн. Тәбиғәт — тылсымлы сер донъяһы. Уның бер генә күренеше лә, ғәжәйеп матурлығы ла ҡабатланмай. Көн дә төрлөсә таң ата, ҡояш байый, төрлөсә шәфәҡ һыҙыла. Болоттар ҙа, төрлө һүрәттәр яһап, әле бер, әле икенсе яҡҡа ағыла ла ағыла. Кисен йондоҙло күктә күңелдәргә нур һәм моң һибеп ай ҡалҡа. Быларҙың бөтәһе лә ниндәй байлыҡ, ниндәй шатлыҡ!

Минең тыуған илем — Башҡортостан, тыуған яғым — Асҡын ерҙәре, күреп туймаҫлыҡ урындарҙың береһе. Солтәнбәк ауылы Урал тауҙарының тармаҡтары араһында һыйынып ултыра. Шағирыбыҙ Мостай Кәрим яҙғанса:

Ошонда мин ҡаршыланым
Көндәрҙең иң яҡтыларын,
Ошо өйҙә ишеттем мин.
өндәрҙең иң татлыларын.
(М.Кәрим)

Һалҡын һыулы Сарс йылғаһы ҡалын урмандар менән ҡапланған бейек Урал тауҙары араһынан ағып төшә. Ул, һылыулығы менән маһайған һымаҡ, эре-эре таштарға һуғылып, сылтырап, көмөш төҫлө тулҡындарын көнө-төнө аҫҡа ҡарай ашыҡтыра. Ике яҡ ярынан һуҙылған ҡуйы йәшел әрәмәлектәренә лә, тау итәктәренә теҙелгән һылыу шыршыларына ла, елгә сайҡалып ултырған зифа буйлы ҡайындарҙың матурлығына һоҡланып туймаҫһың. Төрлө ерҙәрҙә ҡушылған шишмәләр һаны күбәйгән һайын, йылғаның төҫө лә үҙгәрә. Тигеҙ уйһыу урындарҙа ул бөтөнләй шымып ҡалған һымаҡ. Йылға тамағына табан урман һирәгәйә. Уның ҡарауы артабан аҡландар, киң яландар, болондар дауам итә. Терегөмөш кеүек һыуы сылтырап ағып бара-бара ла, Ыйыҡташ эргәһендә Төй йылғаһына ҡушылып Ҡариҙелгә ҡоя.

Элек-электән үк ата-бабаларыбыҙ тәбиғәт ҡосағында тыуып-үҫкән, көн һайын илаһи матурлыҡтан илһам алған, күңеле йыр менән тулған. Тәбиғәт кеше күңелен наҙлар өсөн яратылған тип уйлайым мин. Башҡорт кешеһе бит тәбиғәт ҡосағында ижад иткән, йыр-моң ятраҡан, дуҫтары араһында күңел асып йәшәгән, фәлсәфә иткән, зирәк, рухи яҡтан бай һәм сәләмәт балалар тәрбиәләргә тырышҡан.

Шулай итеп, башҡорт халҡы матурлыҡҡа ынтылып йәшәгән. Ул тауҙарҙы яратҡан, дала иркенлеген данлаған, йылға буйҙарын үҙләштергән, ҡоштар тауышына хайран ҡалған, тауҙар ғорурлығына

hoklанған. Күңеле һәр сак матурлыкka, юғарылыkka ынтылған.

Иртәнсәк тороу менән kояшka бағыу, йылға ағымын күҙәтеү, матур болондарҙы буйлау, сәскәләргә һәм kоштар һайрауына hokланыу, тулkын тауыштарын тыңлау башkорт kанына бәләкәстән үк һеңгән булған.

Шул уk вакытта кешеләр өсөн тәбиғәт йәшәү сығанағы ла булып торған, әммә байлыk сығанағы түгел. Улар үҙенә кәрәклеһен: кейеген, kош-kортон, балығын аулаған, яланда бал kорто тотkан... Ҡыҫkaһы, кеше тәбиғәт менән гармонияла йәшәгән. (Хәҙер ҙә ошондай гармония булһа ине!)

Әммә еребеҙҙе, илебеҙҙе рус баҫkынсылары тартып ала башлайҙар. Байығырға тырышыусыларға бер ни ҙә йәл түгел: тәбиғәт аяуһыҙ kырыла кешеләр аслыkka дусар була. Ирек һөйөүсән ғорур халkым восстаниеларға күтәрелә, әммә бындай баш күтәреүҙәрҙең аҙағы бик фажиғәле тамамлана.

Шуғалыр ҙа, моғайын, башkорттар үҙенең тарихын да, kарғышын да, тау-таштарға сokоп яҙырҙай булып моңланған.

Ҡара ғына урман, kая бите
Шаулайҙыр ҙа кисен ел сакта
Ташkайҙарҙы сokоп яҙҙым kарғыш
Ейәндәрем уkыр бер сакта.

Йырҙарҙа – халыk тарихы... Эйе, уйлаһаң, улар беҙҙең тарихka, көнкүрешкә бәйле. Минең ырыуым тарихындағы хәл-вakиғаларға бәйле йырҙар ҙа бар. Шуның береһе – билдәле башkорт халыk йыры "Тәфтиләү". Был йырҙың тарихы 1735-1736 йылдағы башkорт ихтилалын баҫтырыуҙа үтә нык kанһыҙлыk күрһәткән Ырымбур өлкәһе башлығының ярҙамсыһы мырҙа Ҡотломөхәмәт Тевкилеевтың исеме менән бәйле.

Иҙел буйkайҙары, ай, kояшлыk –
Полковник Тәфтиләү яу урыны
Башkорт илкәйҙәрен утka тотkас,
Алтынланды унның яуырыны.

Беҙҙең Солтәнбәк ауылының тарихы боронғо замандарға барып тоташа. Ошо сихри, гүзәл төйәкте беренсе булып Ғәйет олатайҙан таралған Ҡалмыk нәҫеленән булған башkорт бабаларыбыҙ үҙ иткән. Ә Ғәйет олатай үҙе балыkсы ырыуынан (1-се kушымтаны kарағыҙ). Аш менән атkанға таш менән атмаған улар, ә дуҫka ысын дуҫ була белгән, килгән kунағына һәр вakыт йөҙө асыk, табыны мул булған, әммә иленә kылыс күтәреп килеүсе дошманды аямаған.

Элек ауыл Сарс тип аталған. Был йылға исеменән килеп сыға, сөнки яҙ көндәре етеү менән, йылға үҙ ярҙарынан ташып,

ҡомланып, һарғылт төҫкә инеп ярһыуланып аға. Сарс һүҙен өләсәйҙәр “һары һыу” тип тә йөрөтәләр. Ауылыбыҙ 1672 йылдарҙа барлыҡҡа килә. Был саҡта ауылды Иҫке Сарс тип атайҙар. Ә 1906 йылда ул Солтанбәк тип йөрөтөлә башлай. Был ауылға нигеҙ һалыусыларҙың береһе Солтанбәк Ғүмәров исеме менән бәйле.

1735 йылдағы фажиғә ваҡытында Сарс ауылы яндырыла. XVI быуатта восстаниелар осоро башлана. Халыҡ үҙ ерен һаҡлап көрәшә. Алдар, Күсем, Ҡараһаҡал, Батырша... Был исемдәрҙе ишетеү менән күңелдә ғорурлыҡ тойғоһо уяна, уларға оҡшау теләге арта. Әммә һәр восстание аяныслы тамамлана. Халыҡты язалайҙар, аҫалар, ҡол яһайҙар, һаталар, хатта ауылдары менән яндыралар. Һәм беҙҙең Сарс ауылы ла ошо ҡанлы ваҡиғалар солғанышы эсендә ҡала: Тәфтиләү һәм уның отряды ауылды юҡҡа сығара.

Башҡорт илен тоташ утҡа солғап
Тәфтиләүҙәр ниҙәр ҡылмаған!
Тик батшалар телен киҫкәндә лә
Башҡортом бит телһеҙ булмаған.
(Р.Бикбаев).

Кешеләр уны "Һөйәнтүҙ фажиғәһе" тип йөрөтәләр. Тәфтиләү үҙенең ғәскәре менән илле ике ауылды юҡ иткән. Ауылыбыҙҙа, Унияз аръяҡ тип аталған урман ситендә “Яу зыяраты” урынлашҡан. Уның эргәһенән үткәндә тән сымырлап китә, күңел болғана, йөрәк дарҫлап тибә башлай. Күҙ алдына яндырылған өйҙәр, мәсхәрәләнгән ауылдар, ҡолаҡҡа ҡысҡырып илаған, ялбарған, ҡәһәрләнгән тауыштар ишетелгәндәй була. Бында Һөйәнтүҙ фажиғәһенең ҡорбандары ерләнгән. Тәфтиләү отряды өс йөҙҙән артыҡ кешеләрҙе һарайҙарға ябып, уларҙы аслыҡтан интектереп бер аҙна самаһы тота ла, һуңынан яндырып үлтертерә. Шулай итеп, Сарс ауылы ер йөҙөнән юйыла. Ауыл урынлашҡан ерҙе урман басып ала... Тик халыҡ күңелендә ул һис тә онотолмай, төҙәлмәҫ яра булып ҡала.

Аҫтындағы эйәр атҡа тейер,
Эйәре лә белмәҫ, ат белә
Тәфтиләүҙең ҡылған, ай, ҡәһәрен
Үҙе белмәһә лә, ил белә.

Тәфтиләүҙәр тарафынан яндырылһа ла, ауыл яңынан тергеҙелә. 1775 йылдар тирәһендә бында Солтанбәк Ғүмәров үҙенең улдары Хәйретдин, Абдуллатаф, Шаһимырҙан, Шаһиәхмәт һәм Абдулнасыр менән ошо тирәгә йәшәргә киләләр һәм хәҙерге Солтанбәк ауылына нигеҙ һалалар. (2-се ҡушымтаны ҡарағыҙ). Һуңынан был яҡтарға күрше ауылдарҙан кешеләр күсенеп килә

башлайҙар. Шулай итеп йәмле Сарс буйында яңынан ауыл үҫеп сыға. Бәләкәс кенә был ауыл уйһыу ерҙә урынлашҡан. Уның тәбиғәте бай ҙа, матур ҙа, серле лә...

Солтанбәк ауылын уратып тауҙар күтәрелә. Минә шулар араһында Ҡыятау тип аталған тау оҡшай. Ҡыятау бик бейек, хатта йәшерәк балалар унда менә алмайҙар. Ҡыятауҙың түбәһе бейек-бейек ҡарағай, шыршы ағастары менән ҡапланған. Ҡуйы йәшел ҡарағай һәм шыршы ботаҡтары аша үткән ҡояштың нурҙары йәйелгән йылғаның айырым өлөшөн һарғылт төҫкә буяған һымаҡ күренә. Йылға ярында талдар әкрен генә иҫкән елгә сайҡалалар. Ошо йылға менән Ҡыятау араһында оҙон юл һалынған, ә күпме сер һаҡлайҙыр был ер, әйтеүе лә ҡыйын. Был йылға, был юлдар аша кемдәр генә үтмәне икән! Их, һөйләй белһәләр ине, әллә күпме тарих биттәре беҙгә асылыр ине лә бит. Юҡ, улар – тарихыбыҙҙың өнһөҙ шаһиттары.

Аҡ алъяпҡыс быуған ҡыҙҙар кеүек һылыу, көләс ҡайындар, әле буйға етмәгән һығылып-бөгөлөп торған йәш ҡыҙ билендәй талдар, ҡояшҡа һыуһап буйға һикергән өлпө сәсле муйылдар ошондағы халыҡтың күңелен рухландырып, йәшәргә, көрәшергә ынтылыш биреп, шыптыр-шыптыр йәйен-ҡышын, көҙөн-яҙын үткәреп, һауаның зәңгәрлеген, ерҙең яҡтылығын, йәмен арттырып ултыралар ҙа ултыралар. Бына ошо ағастар уртаһында, Ҡыятауҙың тап уртаһында, ете ҡатлы Ташсоҡор мәмерйәһе урынлашҡан. Мәмерйәнең эсендә бәләкәй генә бер шишмә сылтырай-сылтырай ағып ята. Уның стеналарында төрлө хайуан һүрәттәре һәм яҙыуҙар күп. Был мәмерйә тураһында хикәйәт тә бар.

Аҡтар менән ҡыҙылдар һуғышҡан осор була. Ҡыятауға ҡаршы Ҡаршытау урынлашҡан. өләсәйҙәр һәм олатайҙар һөйләүе буйынса, ошо ике тауҙан аҡтар менән ҡыҙылдар ҡапма-ҡаршы атышҡандар. Ҡыҙылдарҙың штабы нәҡ ошо Ташсоҡор мәмерйәһендә урынлашҡан була ла инде. Уны табыуы бик еңелдән түгел, сөнки юлдан яҙылып саҡ ҡына икенсе яҡҡа тайпылдыңмы, икенсе урынға бараһың да сығаһың. Мәмерйәгә юлды ололар ғына яҡшы беләләр. Хәҙер инде уның өсөнсө ҡатына тиклем генә мереп була. Быуаттар барышында ер баҫылып, мәмерйәнең башҡа ҡатламдарына юлды ҡаплаған.

Ошо мәмерйәнең тарихы бер шәхестең исеме менән бәйле. Ул - Булат бабай, беҙҙең ауылдың абруйлы уҡытыусыһы. Булат бабай башҡорт, урыҫ, татар, төрки һәм инглиз телдәрен яҡшы белгән. Рус, төрки һәм башҡорт яҙмаһына ла маһир Булат бабай. Шуға ла ул, үҙенән тарихи иҫтәлек итеп, мәмерйәлә яҙылған яҙыуҙарҙың нимә аңлатҡаны тураһында 140 битле китап яҙған.

Булат бабайҙы беҙҙең ағайҙар тарих буйынса белгес тип иҫләйҙәр. "Булат ағайҙың дәрестәрен бер ҡасан да онотоп булмай, һәр саҡ көтөп ала торғайнык" - тип һөйләй Зинфир ағайым.

Ҡыятауҙы аша сыкһаң, унда эре-эре еләктәре, төрлө хуш еҫле сәскәләре, матур күбәләктәре һәм зәңгәрһыу йылғаһы менән күҙҙең яуын алып торған аҡландар һуҙыла. Был ер Әндрифкә тип йөрөтөлә. Элек бында урыҫ күскенселәре йәшәгән. "Улар ауылға төшкәндә, беҙ, сиғандар килә икән тип ҡурҡып, ҡайһыбыҙ ҡайҙа эләгә, шунда ҡасып бөтә инек," - тип әсәйем һөйләгәйне. Үҙе һуңынан: "Ниңә ҡурҡҡанбыҙҙыр инде, белмәйем, улар бит беҙҙе ашамаҫтар ине", - тип көлгәнен дә иҫләйем. Хәҙер инде унда, Иҙел ярында, бер-ике урында ғына бәләкәс өйҙәр ултыра. Улар әкиәттәге Мәскәй әбей өйөнә оҡшап ҡалғандар.

Ауыл халҡы Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ла күп улдарын фронтҡа оҙата. Хәҙерге көндә ауылдың бөйөк, иң ихтирамлы кешеләре тип ветерандар һанала. Сөнки улар Ватаныбыҙ өсөн ҡәһәрле һуғышта үҙҙәренең йәндәрен йәлләмәйенсә, фронтҡа барып, баштарын һалғандар. Көн-төн тип тормағандар, тирҙәрен түгеп эшләгәндәр. Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында улар ялдың, йоҡоноң, тәмле ашауҙың һәм яҡшы кейенеүҙең нимә икәнен дә белмәгәндәр. Биш йыл буйына әсеһен дә, сөсөһөн дә, эҫеһен дә, һыуығын да кисергәндәр. Бөтәһе лә минең өсөн, беҙҙең өсөн, хәҙерге яҡшы тормош өсөн, Ватаныбыҙ өсөн.

Башҡорт рухы йәшәй ал ҡанымда,
Рухым тере икән – юғалмаҫ
Ҡанлы тарих йәнгә, аң-зиһенгә
Ғүмерлеккә инеп уралған.

Беҙҙең халыҡта һәр башҡорт үҙенең ете быуынын белергә тейеш, тигән әйтем бар. Әгәр ҙә һәр беребеҙ үҙ шәжәрәләребеҙҙе онотоп йәшәһәк, Башҡорт иле - йәмле Башҡортостаныбыҙ ҙа булмаҫ, үҙ тыуған телебеҙ ҙә һөйләшә һәм уҡый ҙа алмаҫ инек, китап - журналдар ҙа баҫылыуҙан туҡтатылыр, мәҙәниәт, сәнғәтебеҙ бөтөр ине. Р.Ғарипов шиғырында әйтелгәнсә:

Телең барҙа илең бар,
Илең барҙа иркең бар,
Иркең барҙа күркең бар.
Ил биҙәргә дәртең бар,
Ерең, күгең, - икең бар,
Утың, һыуың - дүртең бар.

Элек-электән үк ата-бабаларыбыҙ үҙ шәжәрәләрен ағас формаһында эшләп килгән, уның тамыры - үткәнде, олоно бөгөнгөннө, ә инде булаcаҡ япраҡтары киләсәкте

символлаштырған. Беҙ, башkорт халkы, иң боронғо халыkтарҙан һаналабыҙ. Атай - олатайҙарыбыҙ күпме быуаттар буйы kан kойған, халkыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе, еребеҙҙе һәм телебеҙҙе, ижадыбыҙҙы һәм рухыбыҙҙы һаkлап килгән. Шуға күрә лә, хәҙер беҙҙең изге бурысыбыҙ булып илебеҙҙе һәм телебеҙҙе һаkлап kалып һәм киләсәк быуындарға тағы ла байырак итеп тапшырыу һәм шәжәрәне дауам итеү беҙҙең kулда.

Мин үҙем Солтәнбәк нәҫеленәнмен һәм балыkсы ырыуына kарайым. Олатайымдан мираҫ булып kалған шәжәрәләрем бар. Уларҙы күҙ kарашы кеүек һаkлайым һәм һөйөнөп бөтә алмайым. Хәҙер инде быуыныбыҙ шәжәрәһен дауам итеү минең намыҫта. Бына ул минең нәҫелем шәжәрәһе:




Ниндәй генә ваkиғалар кисермәй минең ауылым! Әммә ул бирешмәй, юkkа сыkмай, һаман да йәшәүен дауам итә. Ауылыбыҙ барлыkkа килеүенә нисәмә быуаттар үтеүенә kарамайынса, беҙ үҙебеҙҙең тарихты онотмайбыҙ һәм киләсәк быуындарға тағы ла тулырак итеп тапшырырға тырышабыҙ. Тарихыбыҙ онотолмаһын өсөн хәҙерге көндә ауылдың мәктәбендә музей ҙа асылды.

Яратам мин тыуған яkтарымды, ысын һөйөү хисе яна

йөрәктә. Ауылымдың һәр урамын, һәр ағасын яратамын.

Изгеләрҙән-изге тыуған ер! Моғайын, ошо мөхәббәт тә мине тормош, тарих тураһында уйланырға мәжбүр итәлер. Сөнки:

Ер тойғоһон, ер йылыһын алып
кендектәрем бында береккән.
Язмышымды минең айырып ķара.
Айырып ķара ошо ерлектән
(Х.Назар).

Осона сығырлыķ түгел тарихтың. Кеше бит нисәмә быуаттар буйына өйрәнә, уķый... Ваķыт та бит өҙлөкһөҙ, йылға кеүек аға ла аға. Төндө көн алмаштырған һымаķ, ололарҙы йәштәр алмаштыра. Тарихыбыҙ ҙа көн һайын йырағая бара. Әле генә булып үткән ваķиғалар әллә ķайҙа алыҫтарҙа тороп ķала. Тарихтың бер генә көнөн дә онотмаҫķа, юғалтмаҫķа тырышырға ине. Сөнки тарих нисек йәшәргә кәрәклеген уйландыра, элекке ата-бабаларыбыҙҙың тормошо менән үҙенден тормошондо сағыштырырға ярҙам итә, хаталарҙы һаķлай.

Һәр быуын вәкилдәре изге эштәрен башķарып, тарихта эҙ ķалдырып был доньянан китә тора. Уларҙың шәжәрәләре киләсәк быуынға ķалырмы, юķмы, шәжәрә ағасы артабан үҫерме, әллә ķорормо?

Миненсә, был хәҙерге ваķытта актуаль мәсьәлә. Бының өсөн ни эшләргә һуң? Мин бының тураһында бик күп уйланам. Иң мөһиме - вайымһыҙ булмаҫķа. Эйе, тарихыбыҙҙы һаķлап ķалыр өсөн бәләкәй генә булһа ла, һәр кеше үҙ өлөшөн индерергә тейеш.

Атай-олатайҙар үҙ тарихын һөйләп, киләсәк быуынға еткерергә хоķуķлы, беҙ уларҙы киләсәк быуынға еткерергә бурыслы. Шулай булғанда ғына беҙҙең тарихыбыҙ, телебеҙ һәм рухбыҙ һүнмәҫ!